✓ *Әбүғалисинаға төндәр буйы йоҡламайынса яфаланып сығыусы берәү килә һәм үҙен дауалауҙы үтенә. Әбүғалисина уға китап бирә һәм: "Кистән ят та, ошо китапты бер генә битен, бер генә юлын, бер генә өлөшөн дә ҡалдырмай уҡы", - ти. "Ә мин йоҡлап киткәнгә тиклем күпме ваҡыт үтергә тейеш?" - ти ауырыу. "Белмәйем, - ти Әбүғалисина. - Күпме генә ваҡыт үтеүгә ҡарамаҫтан, һин уны әрәмгә үткәрмәйәсәкһең...*

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

Киске Өфө

12 - 18 МАЙ (ҺАБАНАЙ) 2012 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№19 (489)

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Башҡорт Сыңғыҙханы…

алышҡа әҙерләнә

4

Шәжәрә башында…

Ҡандр бей тора

7

Һыуһаным, һыуҙар биреҙ,

8-10 үҙем һыу буйҙарында…

Йылан мажараларын…

тарих итеп һөйләргә генә ҡалмаһын ине

12

14 ТВ-программа

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

Дәүләткә генә һалынып йәшәргә күнеккәнбеҙ. Үҙ ғаиләбеҙҙе бәләкәй генә бер дәүләткә әйләндереп, үҙебеҙҙең ҡулдан килгәнде, Хоҙайҙан бурыс итеп йөкмәтелгәнде эшләп йәшәү яҡшыраҡ түгелме?

Мәрйәм БУРАҠАЕВА, яҙыусы: Һәр ғаилә - үҙе бер бәләкәй генә дәүләт. Дәүләт икән, тимәк, уның шәжәрә, исем, туған тел кеүек атрибуттары ла була. Шәжәрә - иңә тиклем ошо нәҫелде һаҡлап килеүсе атай-олатайҙар алдында яуаплылыҡ, исем - үҙ милләтеңә ҡарата ихтирам тойғоһо тәрбиәләү, туған тел нәҫел традицияһын, милләт ҡотон һаҡлау асҡысы булған өсөн кәрәк. Ғаилә-дәүләттең төп тәрбиә ҡанундары ла була. Мәҫәлән, башҡорт ғаиләһендә "Урал батыр" эпосында һәм башҡа халыҡ ижады өлгөләрендә тупланған тәрбиә ҡанундары өҫтөнлөк итә. Ғаилә өсөн уртаҡ маҡсат - ир балалар атай яғынан шәжәрәнең төп асылын боҙмайынса дауам итергә тейеш. Уландарың шәжәрәңде һәм ғаилә традицияларын дауам итерҙәй көләш алмай икән, тимәк, ул ғаилә-дәүләт традицияһын да ихтирам итмәй, үҙ шәжәрәһен дә дауам итә алмай. Сөнки бала әсә ҡарынында ярала, әсә моңон һеңдерә.

Илебеҙ хөкүмәтенең хәстәрлеге былай ҙа бик оло: илдә именлек, тыныслыҡ һаҡлау, халыҡты етеш-мул тормошта йәшәтеү, төрлө афәттәрҙән ҡурсалау, хәйерселек, етемлек булдырмау. Ә башҡа хәстәрлекте һәр ғаилә-дәүләт үҙ елкәһенә алырға тейеш. Шәжәрәне һаҡлау, дауам итеү, ғаиләлә туған телдә һөйләшеү, тәрбиәле һәм эш һөйөүсән балалар үҫтереү, республикабыҙҙа, илдә йәшәгән һәм шулай уҡ бөтөн донъялағы башҡа милләттәрҙе ихтирам итеү, үҙеңдән һуң яҡшы исем ҡалдырыу, ил мәнфәғәттәрен аңлау, белемгә, камиллыҡҡа ынтылыу һәм илһөйәрлек тойғоһо тәрбиәләү - һәр ғаилә-дәүләттең бурысы. Бындай төшөнсәләрҙе, бындай ҡиммәттәрҙе бала фәҡәт ғаиләлә башлап ала.

Сәлмән ЯРМУЛЛИН, "Аманат" журналының баш мөхәррире, өс бала атаһы: Башлығы, үҙ йола-традициялары, башҡа иерархиялары булыуы менән, ысынлап та, ғаиләне дәүләттең бәләкәй генә моделе тип күҙ алдына килтерергә була. Армияла миңә Урта Азия егеттәре менән хеҙмәт итергә тура килгәйне. Улар үҙҙәренең күмәк балалы ғаиләнән сығыуы менән бик ғорурлана инеләр. Бер ҡаҙаҡ егете, ғаиләлә мин 14-се баламын, тип аптырата ине бөтәһен дә. Улай булғас, әсәйең эшләмәйҙер, эшләмәгәс, пенсия ла алмаясаҡ бит инде, тип төпләшәбеҙ. "Ә беҙҙе нимәгә үҫтерә ул, беҙ уға пенсия!" тип яуаплай ҡаҙаҡ балаһы. Уның әсәһе дәүләттең етереттмәҫ пенсияһына тилмереп ултырмаясаҡ, уны балалары ҡараясаҡ, балалары тәьмин итәсәк, тигәнде аңлата ине уның һүҙҙәре.

Ғаиләнән тотош дәүләт яралыуы айырыуса йәһүдтәр яҙмышында асыҡ сағыла. Ике мең йыл элек тарҡалып юҡҡа сыҡҡан ошо милләт әһелдәре үҙ ғаиләләрендә үҙҙәрен һаҡлап ҡалып, бәләкәй Израиль дәүләтен барлыҡҡа килтерҙе, йәғни ике мең йылдан һуң да үҙ дәүләтен аяҡҡа баҫтырҙы.

Әгәр беҙ бөгөн шәхес тәрбиәләү, балаларыбыҙҙа туған теленә, иленә һөйөү тәрбиәләү мәсьәләләрендә мәктәпкә генә ышанып ултырһаҡ, булғанын да юғалтыуыбыҙ ихтимал. "Әҙәп барҙа - иман бар" тип ҡабатлар ине өләсәйем. Бала саҡта уның мәғәнәһенә бик төшөнөп бармаһам да, үҫә килә ололар һүҙе үҙ шытымын бирҙе барыбер. Әҙәпле кеше иманлы була. Ә был хазинаны ул ғаиләһенән алып сығырға тейеш. Баланы мәктәп тәрбиәләмәй, ул белем бирә. Тәрбиә, әҙәп-әхлаҡ ҡанундары бала күңеленә фәҡәт ғаиләлә һалына. Шуға күрә лә ғаилә институтын нығытыу көнүҙәк мәсьәләләрҙең береһе бөгөн. Баланы насарлыҡтарҙан аралау, лайыҡлы белем биреү, хатта торлаҡлы итеү ҙә бөгөн ата-әсә елкәһендә. Бер аҡыл эйәһе әйткән бит, миңә таныр нөктә бирһәң, мин Ерҙе әйләндереп һалыр инем, тип. Шуның кеүек, балаларҙы ла башлы-күҙле итеп, йәш ғаиләгә ҡәҙимге йәшәп китер өсөн төп ике таяу - белем һәм торор урын менән тәьмин итеү шарт, тип уйлайым. Әлбиттә, улар әҙерҙең ҡәҙерен белер кимәлдә булһалар инде. Дәүләткә йәки ата-әсәһенә һалышырға теләмәгән, бөтәһенә лә үҙ көсө, тырышлығы менән өлгәшергә ынтылған балалар ҙа була. Уларға инде "балығын түгел, ҡармаҡлы ҡыуал" тоттораһың. Аҡыллыға ишара, тигәндәй, йүнле тәрбиә алған бала үҙ маҡсатына үҙаллы ла өлгәшәсәк.

(Дауамы 2-се биттә).

ИҒТИБАР: ФОТОКОНКУРС!

"АУЫЛДА - БАЙРАМ"

Ауылдарҙа байрам итә беләләрме? Әллә һәр кем үҙ өйөнә генә бикләнеп, табын ҡороп йә телевизор экранына текәлеп ултырып ҡына үткәрәме байрамдарҙы? Һәр хәлдә, гәзитебеҙҙә "Ауылда - байрам" тигән фотоконкурс ойоштороп, ошо һорауға асыҡлыҡ индерергә, байрам итә белеүсе ауылдарҙы бар республикаға өлгө итеп күрһәтергә, тигән маҡсат алдыҡ. Тәүге матур өлгөнө хеҙмәткәребеҙ Артур Батыршин Баймаҡ районы Иҫке Сибай ауылынан тәҡдим итә. Был ауылда 9 Май - Еңеү көнөндә бар халыҡтың урамға сығып, мәктәп балалары ойошторған парадты тамаша ҡылыуы, һуғыш һәм тыл ветерандарын сәләмләүе, ҡотлауы матур йолаға әүерелгән. Йә, тағы ҡайҙа шулай байрам итәләр? Фотоконкурстың шарты ябай: ауылда үткән байрамдарҙан фотоһүрәттәр һәм шуға ҡушып бәләкәй генә хәбәр. Хаттар көтәбеҙ.

(Фотолар 4-се биттә).

✓ *Ә урамдарҙа кешеләрҙең йәмһеҙ ҡыланыуынан көн дә кәйеф боҙола. Йәштәрҙең туҡталышта һүгенеп һөйләшеүе, төкөрөнөүе, шешәһенән күтәреп һыра һемереүе, көпә-көндөҙ ҡосаҡлашып-үбешеп тороуы ерәндерә.*

БАШ ЙОРТТА...

КИРЕ ЯҠТАР ҘА...

яҡшы яҡтар ҙа бар

Һуңғы йылдарҙа Өфөнө танырлыҡ та түгел. Ләкин ыңғай ғына түгел, кире яҡҡа ла үҙгәрештәр бар шул.

Яҡшы яғы - ул яңы архитектура проекттары буйынса матур өйҙәр, төрлө объекттар төҙөлөүе, урамдарҙың киңәйтелеүе, таҙалыҡты һаҡларға тырышыу, һәр ерҙә йәшеллектең күҙгә ташланыуы. Әммә баш ҡалабыҙҙа йәмһеҙ күренештәр ҙә бихисап. Бәлки, күмәклəп уйлап, булған проблемаларҙы киләсәктә бер ни тиклем хәл итеп булыр? Ни тиһәң дә, бер баш яҡшы, ике баш яҡшыраҡ, тип юҡҡа ғына әйтмәйҙәр.

Баш ҡалала күңелде ҡырған беренсе мәсьәлә - машиналарҙың күплеге. Шул сәбәпле юлдарҙа тығындар барлыҡҡа килә, шау-шыу көслө. Йорттар ихатаһында, подъезд алдарында торған машиналар күсенеүселәргә, йә яңы мебель килтертеүселәргә генә түгел, "Ашығыс ярҙам, башҡа хеҙмәттәргә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра.

Былтыр халыҡтан рөхсәт тә һорап тормай, кәңәшләшмәй-нитмәй, Цюрупа, Ленин урамдарын бер яҡлы хәрәкәтле итеү ҙә үҙен аҡланы. Ҡайҙалыр барам тиһәң, туҡталыштар үҙгәреү сәбәпле, ярты Өфөнө йәйәү урап сығаһың. Машина менән йөрөүселәргә лә, уңайлы юл эҙләп, байтаҡ ҡаңғырып йөрөргә тура килә.

Икенсе мәсьәлә - халыҡтың әхлаҡи тәртибе, үҙ-үҙен тотошо. Хәҙер йәмәғәт транспортында ололарға урын биреү бөтөнләй онотолдо. Ә урамдарҙа кешеләрҙең йәмһеҙ ҡыланыуынан көн дә кәйеф боҙола, ҡалаға ситтән килгән ҡунаҡтар алдында бигерәк тә оят. Йәштәрҙең туҡталышта һүгенеп һөйләшеүе, төкөрөнөүе, шешәһенән күтәреп һыра һемереүе, көпә-көндөҙ ҡосаҡлашып-үбешеп тороуы ерәндерә. Ҡатын-ҡыҙҙың ярым яланғас йөрөүенә ҡарап, был ҡалала тик фәхишәләр генә йәшәй икән, тигән һығымтаға килергә мөмкин. Мосолман республикаһы булараҡ, дәүләтебеҙҙә, Чечнялағы һымаҡ, кейемгә дресс-код индерһәк тә насар булмаҫ ине. Ҡатын-ҡыҙға еңһеҙ, күкрәге асыҡ һәм ҡыҫҡа итәкле кейем кейеүҙе ҡәтғи рәүештә тыйырға һәм ҙур күләмдәге штраф санкцияһы булдырырға кәрәк. Быныҡ өсөн әҙәп-әхлаҡ полицияһын ойоштороу мөһим.

Ғ. АМАТУЛЛАһ.

ӘЙТ, ТИһӘГЕҘ...

Дәүләткә генә һалынып йәшәргә күнеккәнбеҙ. Үҙ ғаиләбеҙҙе бәләкәй генә бер дәүләткә әйләндереп, үҙебеҙҙең кулдан килгәнде, Хоҙайҙан бурыс итеп йөкмәтелгәнде эшләп йәшәү яҡшыраҡ түгелме?

(Башы 1-се биттә).

Әлфиә ӘСӘҘУЛЛИНА, шағирә, дүрт бала әсәһе: Башҡортомдоң "Ояһында ни күрһә, осҡанында шул булыр" тигән бик тапҡыр әйтеме бар бит, ул балаға тап ана шул ғаилә мөхитендә тәрбиә биреүгә ишаралай ҙа инде. Тормошто диңгеҙ менән сағыштырһаҡ, ғаилә - карап, атай кеше - капитан, әсәй штурман һымаҡ була инде. Оло диңгеҙҙə ни генә булмаҫ. Ғаилə карабын ҡаршылыҡтар айсбергына бәреп ҡыйратмаҫ өсөн атай-капитан менән әсәй-штурмандан күпме айыҡ аҡыл, сабырлыҡ, ныҡышмаллыҡ, бер-береһен аңлап йәшәү өсөн зиһен көсө талап ителə. Ғаилə оло илдең бер күҙәнәге булһа ла, ул үҙ мөхитендə килеп тыуған проблемаларҙы бер кемгə лə һалышмай ғына атҡарырға тейеш, сөнки ул проблемалар - һинеке, ə үҙеңдеке - үҙəктə. Күҙ алдына килтереп ҡараһаҡ, ситтəн кемдер һинең ғаилə тормошоңа ҡыҫылырға теләһə, быны кем генə оҡшатыр икəн? Кешене кеше иткəн нəмə - хеҙмəт. Хеҙмəткə хөрмəт һəр яҡшы нəмəнең башланғысы һымаҡ уҡ, ғаиләлə һалына. Бəләкəй бала нимə генə эшләһəң дə ҡыҫылып, туҡтауһыҙ һорауҙарын яуҙырып, теңкəне ҡоротоуы һəр кемгə мəғлүм. Бына ошо ваҡытта эшеңде тиҙерəк осламаҡ булып, баланы тыйһаң, эргəңдəн ҡыуып ебəрһəң, тəрбиə эшендə тəүге хатаны яһаныҡ, тигəн һүҙ. Ғаиләлə алынған тормош набаҡтары ғүмер буйы тоғро юлдаш булыр балаңа. Тулы ғаиләлə хеҙмəт тəрбиəһе алып үҫкəн бала тормошта үҙ юҫығын тиҙерəк табасаҡ, илебеҙгə кəрəкле, файҙалы шəхес булып өлгөрəсəк.

Тәнзилә БИКБАЕВА, Ф.Мостафина исемендәге 20-се ҡала башҡорт гимназияһы уҡытыусыһы: Беҙҙə, дөрөҫөн əйткəндə, ғаиләләр ана шулай бəләкəй генə дəүлəт рəүешендə үҙ көндəрен үҙҙəре күреп йəшəй ҙə инде. Элегерәк, совет осоронда, кеше дəүлəткə һалышып өйрəнеп киткəйне, баҙар шарттары халыҡты ниндəйҙер кимəлдə үҙаллылыҡҡа өйрəтте, тип əйтергə булалыр, моғайын, сөнки бындай үҙгəрештəр иң тəүҙə ғаиләләр тормошонда сағылыш тапты. Юғары белем түləүле булып китһə лə күпселек ата-əсə юғалып ҡалманы, балаларын уҡытырға тырышты. Гел ҡабатланған хəҡиҡəт булһа ла тағы бер ҡабатлауҙан зыян юҡтыр, тием: бала яҙмышы өсөн бөтə яуаплылыҡ- ата-əсə иңендə. Əхлаҡи һəм рухи тəрбиə биреү, үҙ халҡына, теленə, иленə һөйөү уятыу - ата-əсə бурысы. Хəҙерге заманда йəш ғаиләләр тап бына ошоларға иғтибар биреп еткермəй, йə булмаһа, тəрбиə эшен ҡасандыр, əйтəйек, уҡырға төшкəс йəки берəй 10 йəштəнме башларға кəрəк, тип иҫəпləй. Ə бит тəрбиə бишектəн башлана. Улай ғына ла түгел, əсə телмəре аша туған телде һиҙемləү, туған моңдарыбыҙҙы тойомлау балала əсə ҡарынында уҡ башлана, ти ғалимдар. Шуға күрə, мəктəпкə барғас белер əле, тигəн хата уйға төшмəҫкə, тəрбиə бурысын кисектермəҫкə кəрəк, сөнки баланың киләсəге иң тəү сиратта мəктəп йə дəүлəт ҡулында түгел, ə ата-əсə ҡарамағында. Дəүлəтебеҙҙең тəрбиə һəм белем биреү учреждениеларына бала үҙе үҫкəн мөхиттəге ҡиммəттəрҙе үҙ йəшенə ярашлы кимəлдə туплаған хəлдə килергə тейеш, тип уйлайым.

Фəүзиə МӨХƏМƏТШИНА яҙып алды.

ИҒТИБАР!

МӨХТӘРӘМ УҠЫУСЫЛАРЫБЫҘ!

2012 йылдың икенсе яртыһында ла өйҙәрегеҙгә "Киске Өфө" гәзите килеүен, уның аша зиһенде ҡуҙғытыр, йөрәкте ярһытыр, рухты күтәрер, сәмгә ут һалыр мәғлүмәт алырға теләйһегеҙме? Улайһа, июнь айы бөткәнсе почтаға инеп, баҫмабыҙға яҙылыу мөҙҙәтен оҙайтырға онотоп ҡуймағыҙ.

Кем **"Киске Өфө"**гə май айында яҙылған, квитанцияһын редакциябыҙға ебəреп, бəхетен һынап ҡараһын: **3 кеше "400 башҡорт халыҡ йыры" китабына эйə буласаҡ.** Ə апрелдəге еңеүселəребеҙ - Ишембай районы Яңы Əптек ауылынан **Вараҡа Ғəлəүетдинова**, Баймаҡ районы Ярат ауылынан **Маһикамал Иҫəндəүлəтова**, Бүздəк районы Ҡаңғы-Төркəй ауылынан **Ришат Юнысов**.

● Квитанцияларығыҙ менəн бергə **тыуған көндəрегеҙҙе** лə хəбəр итегеҙ. Гəзитебеҙ аша уҡыусыларыбыҙҙы тыуған көнө менəн ҡотлау - беҙгə лə мəртəбə, һеҙгə лə шатлыҡ өҫтөнə шатлыҡ өҫтəр.

● **"Киске Өфө" - бүлəгем"** акцияһы лə дауам итə. Уға ҡушылып, ауылдарҙағы туғандарығыҙға, ата-əсəйҙəргə, мəсеттəргə, таныштарығыҙға гəзитебеҙҙе яҙҙырып шатландырығыҙ.

Өфөлə йəшəүселəр өсөн гəзитебеҙгə яҙылыуҙың тағы шундай юлдары бар:

● Йəшəгəн йортоғоҙ эргəһендəге "Өфө-матбуғат" киоскыһында 6 айға **270 һумға** яҙыла алаһығыҙ - почта йəшниге юҡ, тип һылтанырға ла кəрəкмəй, аҙнаһына бер тапҡыр шəмбе көндө ошо киоскынан ғына сығаһығыҙ ҙа алаһығыҙ.

● Коллективығыҙ менəн яҙылһағыҙ (кəмендə 10 дана), редакция гəзитте эшлəгəн урынығыҙға үҙе килтереп бирə - шулай уҡ уңайлы ла, арзанға ла тура килə: ярты йылға **234 һум**.

● Яҡын йəшəгəндəр редакциябыҙҙа яҙылып, аҙна һайын үҙе килеп алып йөрөй ала: ярты йылға **240 һум**.

"Киске Өфө"нөң индексы - 50665. 2012 йылдың икенсе яртыһына яҙылыу хаҡы - 354 һум 24 тин.

Əйткəндəй, 10 майҙан 20 майға тиклем почта бүлексəлəрендə гəзит-журналдарға ташламалы яҙылыу иғлан ителде. 50665 индекслы "Киске Өфө"гə ярты йылға 348 һум 24 тингə яҙылып була.

Бергə булайыҡ, бергə-бергə фекер ҡорайыҡ, донъя хəтəрҙəрен, борсолоуҙарҙы бергə еңəйек, шатлыҡ-ҡыуаныстарҙы бергə уртаҡлашайыҡ!

НИМƏ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостан Президенты Рөстəм Хəмитов коляскала йөрөүсе инвалидтар өсөн ҡала электр транспорты презентацияһында ҡатнашты. Сара Советтар Союзы Геройы С.И.Зорин исемендəге 1-се Өфө трамвай депоһында үтте. Башҡортостан Президенты коляскала йөрөүсе инвалидтар өсөн ҡулайлаштырылған трамвайҙы ҡараны. Усть-Ҡатау вагондар төҙөү заводында етештерелгəн был трамвай быйыл Өфө электр транспорты идараһына ҡайтасаҡ дүрт вагондың беренсеһе. Уға инвалид пассажирҙарҙы ултыртыу-төшөрөү өсөн махсус баҫма монтажланған.

✓Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, "Комдив Шәйморатов. Геройҙың ҡайтыуы" акцияһында ҡатнашып, 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы командиры Миңлеғəле Шәйморатовҡа үлгəндəн һуң Рəсəй Геройы исемен биреүҙе яҡлап, Башҡортостандың 57 муниципаль берəмегендə йəшəүсе халыҡтан 185 меңдəн ашыу ҡултамға йыйҙы. Акция сиктəрендə ҡултамға йыйыу пункты Өфө ҡалаһы, Левитан урамы, 27 адресы буйынса 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы музейында урынлашҡан. Телефондар: (347)227-52-02, 227-47-57

✓2012 йылдың 1 ғинуарына ҡарата алынған мəғлүмəттəргə ярашлы, республикала 72154 Бөйөк Ватан һуғышы ветераны йəшəй. "Ветерандар тураһында"ғы федераль закон менəн социаль ярҙам саралары ҡаралған ветерандар ҙа улар иҫəбендə. Былар 2576 һуғыш инвалиды, 4774 Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусы, хəрəкəт итеүсе армия составына инмəгəн гəскəрҙə хеҙмəт иткəн 1047 хəрби хеҙмəткəр, блокадалағы Ленинградта йəшəгəн 223 кеше.

✓Башҡортостанда бөгөн бер генə Советтар Союзы Геройы иҫəн - ул Өфөлə йəшəгəн отставкалағы майор Тажетдин Ғиләжетдинов. Бындай юғары исемгə заманында 280 яҡташыбыҙ лайыҡ булған. Был турала Өфөлəге Конгресс-холда ойоштороlған Бөйөк Ватан һуғышы ветерандарын һəм тыл хеҙмəтсəндəрен Еңеү көнө менəн ҡотлау тантанаһында Башҡортостан Президенты Рөстəм Хəмитов хəбəр итте.

ИШАРА

БЕР ТӨРЛӨ ҺӨЙЛӘЙҘӘР...

икенсене эшләйҙәр

Һәр атҡан таңым менән күңелгә ниндәйҙер шиғыр юлдары килә. Бына әле, май байрамдары көндәрендә, Мостай Кәримдең 1941 йылда яҙған ошо шиғыр юлдарын иҫкә төшөрҙөм:

Сал ҡартлығын һаҡлап ҡарттарымдың,
Һылыуҙарын һаҡлап илемдең,
Бөйөклөгөн һаҡлап Уралымдың,
Гүзәллеген һаҡлап Иҙелдең,
Тыуасаҡ таң, тыуасаҡ яҙ өсөн,
Яҙын япраҡланыр гөл өсөн,
Тыуыр балам, йырланыр йыр өсөн,
Йыр өсөн һәм тыуған ер өсөн -
Мин фронтҡа китәм, иптәштәр...

Был шиғыр беҙҙең йәштәшебеҙ. Эйе, шундай ҡурҡыныс, әммә юғары илһөйәрлек рухы өҫтөнлөк иткән йылдарҙа тыуғанбыҙ беҙ. Ә бына бөгөн, күпме ҡорбандар биреп яуыз дошманды, фашизмды еңгән халҡым ниңәлер көсһеҙләнә, рухы һүнә бара кеүек. Ә бит был хәл бөгөн генә түгел, 1970 йылдарҙа уҡ күҙәтелә ине. Иҫемдә, 1972 йылда Мәскәүҙә уҡыуымды тамамлап, диплом тотоп, Өфөгә ҡайттым. Уңға, һулға бәреләм, эшкә урынлаша, торлаҡ таба алмайым. Бер көндө уҡытыусымдан кәңәш һорарға барҙым һәм: "Ағай, һәйбәт кешеләр күренмәй, ҡайҙа юғалды улар?"- тип һорамай булдыра алманым. Уҡытыусы ағай көрһөндө лә: "Мәскәүҙә, Третьяковка музейында Ивановтың "Явление Христа народу" картинаһын күрҙеңме?"- тип һораны. "Эйе, бер ҙур стенаны биләп эленеп тора ул, ә бүтән стеналарҙа шул әҫәргә йыйылған төрлө йөҙҙәрҙең эскиздары эленгән", - тинем. Уҡытыусым: "Бына шул эскиздарҙың атамаларына иғтибар иттеңме, "Үкенеүсе", "Икеләнеүсе", "Ҡурҡыусы" һ.б. Бына шундайҙар ғына ҡалды шикелле беҙҙең тормошта ла. Күңелдәргә ҡурҡыу, икеләнеү хисе инеп урынлашты..." - тип тамамланы уҡытыусым һүҙен.

Эйе, рухты күтәреү өсөн йыш ҡына шиғыр уҡып алам. Йә булмаһа, шулай уҡ юғары рух менән һуғарылған матур бала саҡ ваҡиғаларын иҫкә төшөрәм. Хәтеремдә, бик кескәй саҡта "Минең уйымды әйт" тигән уйын уйлап сығарғайныҡ. Ҡыҙыҡ уйын ине ул, сөнки ул ышанысҡа ҡорола ине. Уйынды алып барыусы һиңә һорау бирә, үҙе үк яуабын да ҡабатлай, дөрөҫ яуапты инҡар итергә ярамай. Әлбиттә, беҙҙең бөтөн уй-һорауҙар Чапай, Буденный, Гитлер, фашист, һуғыш, Еңеү, йондоҙ кеүек һүҙҙәргә бәйле ине. Яуап бирә алмаһаң, уй уйлаусы: "Йә, әйт, улайһа, яҡшы кешеме, әллә насар кешеме?" йәки "Насарлыҡмы, әллә яҡшылыҡмы?" тип ярҙам итеп тә ебәрә ине. Бала саҡ уйыны ышанысҡа ҡоролғайны. Ә бөгөн ышаныс тигәндең бер нәмәһе лә ҡалмай бара түгелме? Хәйер, тарих ҡабатлана, тиҙәр бит. Башҡорттар, ышанып, Иван Грозный менән килешеү төҙөгән, үҙ еренә аҫабалыҡ алған, әммә һуңынан ышаныс аяҡ аҫтына һалып тапалған, ерҙәребеҙҙе талау киткән. Аҙаҡтан да, ышанып, Рәсәй менән төрлө килешеүҙәр төҙөһәк тә, ваҡыт үтеү менән килешеүҙәр юҡҡа сығарыла килгән. Әле күптән түгел генә суверенитет яуланыҡ та, уны тағы тартып алдылар. Ышанып таянырҙай закондар ҙа юҡ һымаҡ илебеҙҙә...

Эйе, әленән-әле бала саҡты иҫкә төшөрөп, бала саҡ хәтирәләре менән йәшәлә. Ышанысҡа, тоғролоҡҡа, сафлыҡҡа ҡоролғайны ул саҡта беҙ уйнаған уйындар. Ә бына әлеге "уйын ҡороусылар" бер төрлө уйлай, икенсе төрлө һөйләй, өсөнсө төрлө эш башҡара. Ышаныс юҡҡа сыға...

Айгөл АХУНОВА.

"КИСКЕ ӨФӨ"ГӘ -10 ЙЫЛ

БӨЙӨК ХИС-ТОЙҒО ТӘРБИӘЛӘЙ

Баш йортобоҙҙа башҡорт телендә үҙ аллы донъя күргән "Киске Өфө" гәзитен тәүге көндәренән башлап уҡып барам. Уның аша ҡабул ителгән көндәлек рухи тормошта кәрәк кәңәштәр һәр бер башҡорт иреген, ҡыҙ-ҡатынын уйландыра, сәмләндерә, йәшәйештең йәмен аса, тормошҡа ышанысын арттыра.

Яратҡан гәзитебеҙ ун йыл буйы башҡорт халҡын милли идея тирәләй туплау йәһәтенән ғәйәт ҙур эшмәкәрлек алып бара. Башҡорттоң йәнле һөйләш өлгөләре лә, фәлсәфәгә бай ауыҙ-тел ижады һәм әҙәби тел ынйылары ла балҡый һәр рубрикалағы мәҡәләләрҙә. "Киске Өфө"гәзите беҙҙе халҡыбыҙҙың ябай вәкиле менән дә, арҙаҡлы зыялылары менән дә тиң һәм тигеҙ таныштыра. Уларҙың яҡты өлгөһөндә рухлы йәш ғаиләләр ишәйә. "Диалог" һәм "Монолог" рубрикаларында сығыш яһаусыларҙан ысын мәғәнәһендә фәһем алабыҙ. Һәр осрашыу - үҙе бер асыш, үҙе бер табыш. Халҡыбыҙҙың рух шишмәһе найыҡмаған икән әле, тигән ҡыуаныс тойғоһо биләй күңелде.Фәндең төрлө өлкәһендә эшләүсе ғалимдарҙың, шағир-яҙыусыларҙың "Киске Өфө" биттәрендә сығыш яһауы башҡорт халҡын туплай, уйлы, йырҙағыса, "уйсан" булырға өндәй, милләт киләсәгенә дөрөҫ юл һайлау йүнәлешен бирә.

"Киске Өфө" күп яҡлы тәрбиә биреүсе трибуна ла. Ниндәй генә сетерекле хәлгә тарыһаң да, күренекле фәйләсүфебеҙ Ризаитдин Фәхретдин кәңәштәре, Гүзәл Ситдиҡованың килен менән кейәүгә нәсихәттәре, Рауфан Мортазиндың "Космоэнергетика һәм сәләмәтлек" тигән яҙмаларындағы психологик торошто яҡшыға үҙгәртеү алымдары беҙгә ярҙамға килә. "Аҡыл - ҡаҙна"ла тупланған аҡыл эйәләренең мәргән һүҙҙәре, тәрән йөкмәткеле риүәйәттәре - барыһы ла беҙгә кәрәк. "Уңыш ҡаҙан"дағы кәңәштәр ҙә бик уҡымлы. Башҡорт юморының үҙенсәлекле үрнәктәрен туплау буйынса баһалап бөткөһөҙ эш йәйелдерелде, яңыраҡ интернет-конкурс та иғлан ителде - бик хуп.

Миңһылыу АБДУЛЛИНА,
Өфөнөң Дим районы 123-сө лицейының башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы.

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

УТЫН ҺАТ, БӘЛЕШ БЕШЕР - бына шулай килем килер

Гәзит файҙалы һәм кәрәкле рубрика асҡан. Килем алыуҙың төрлө юлдарын тапҡан һәм ҡулланған кешеләр хаҡында уҡып һоҡланам. Тимәк, улар ҡайҙандыр нимәләр көтөп ятмай, ә үҙ тормошон үҙе ҡора, аҡса таба, балалар үҫтерә. Мин дә гәзит уҡыусылар менән аҡса эшләү хаҡында бер-нисә фекерем менән уртаҡлашҡым килә.

Өфөлә ғүмер кисерһәм дә, тыуған ауылым Архангел районы Яңы Ҡыҙылъяр ауылына йыш ҡайтабыҙ. Йәйге осорҙа иһә һәр ялыбыҙҙы ауылда үткәрәбеҙ. Ауыл йәмле Инйәр буйында урынлашҡан, шуға күрә уның урамдарында һәр ваҡыт үтеп-һүтеп йөрөүсе туристар күп була. Бигерәк тә йәй көнө алма төшөр ҙә урын булмай. Ауыл ҡатын-ҡыҙҙарына: "Бына бит, аҡса үҙе ҡулығыҙға килеп инергә тора, бешер бәлешеңде, ҡоймағыңды, һат уларҙы ошо туристарға", - тим. Походҡа сығып ҡараған кеше белә: урман-ҡырҙа, айырыуса һыу ингән саҡта, бик тиҙ асыҡтыра, ә ҡул аҫтында ҡапҡылап алырлыҡ аҙыҡ һәр ваҡытта ла булмай. Тап ошондай саҡта биленә матур һәм таҙа алъяпҡыс бәйләп, тәмле итеп бешерелгән, әле генә уттан алынған бәрәңгеле, итле йәки башҡа төрлө эслек һалынған бәлештәреңде тәҡдим ит бит инде шул туристарға- тиҙ үк һатып алып бөтәсәктәр. Шулай уҡ яңы ғына һауылған һөт йәки башҡа төрлө һөт аҙыҡтары тәҡдим ит - ҡала халҡы ҡуш ҡуллап аласаҡ. Был, минеңсә, йәйге эҫелә бешеп, серәкәйҙән таланып, балаларҙы ыҙалатып, еләк йыйып һатыуға ҡарағанда, күпкә еңелерәк тә, төшөмлөрәк тә.

Әле биш йыл элек Булгаково ауылы янындағы юлда бәлеш, эҫе сәй, ҡәһүә һатып тороусы ҡатын-ҡыҙҙар янына туҡталып, был шөғөлдәренән килгән көндәлек килемдең 1 мең һум булыуын ишетеп ғәжәпләнгәйнем. Улар ҙа, күптәр кеүек, өйҙәрендә генә ултыра алыр ине, тик ғаиләһенә ниндәй ҙә булһа килем килтереү өсөн эҫегә лә түҙәләр, һыуыҡта өшөүгә лә күнәләр.

Аҡса эшләүҙең икенсе юлы ла бар. Уныһы иреттәр өсөн. Туристарға аш бешереү һәм сәй ҡайнатыу өсөн утын кәрәк, ә Инйәр буйҙарына ял итергә килеүселәр уны тирә-яҡтан таба алмай ҡаңғыра. Ялға ғына ҡайтҡан арала ла беҙҙең йорт янына килеп, әллә күпме турист утын һорап йөрөй. Эшлә һин шуларға утын бәйләме. Мәҫәлән, магазинда 5-6 утындан торған бер бәйләм 100 һум тора, тимәк, 10 бәйләм һатҡанда ла, көнөнә 1000 һум аҡса ҡулыңа инә, тигән һүҙ. Тик ялҡауланмаҫҡа ғына кәрәк, егеттәр! Инйәр буйындағы ауылдарҙың һәр береһенә көн дә тиҫтәләгән турист туҡтай. Уларҙың яртыһын ғына хеҙмәтләндергәндә лә байтаҡ аҡса алып ҡалырға мөмкин.

Зәкир ҒӘЛИН.

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓10 майҙан транспорт картаһы ҡулланған "Башавтотранс" дәүләт предприятиеһы автобустары пассажирҙары яңы тариф буйынса йөрөйәсәк. Элекке 8 һум 40 тин урынына юл йөрөү 12 һумға төшәсәк. Шул уҡ ваҡытта, хаҡ артыуына ҡарамаҫтан, был сумма ҡулаҡса менән түләгәнгә ҡарағанда барыбер кәмерәк. Ә ҡулаҡсаға алынған билет хаҡы үҙгәрешһеҙ ҡалған һәм әүәлгесә 15 һум тәшкил итә.

✓"Ирәндек батыры" беренсе республика спорт фестивале Сибайҙа 1-3 июндә үтәсәк. Төбәктең Йәштәр сәйәсәте һәм спорт министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, спорт фестивале ике этапта үткәрелә. Беренсе этап ярыштары 25 майға тиклем республиканың муниципаль райондары һәм ҡала округтарында үтәсәк. Икенсе этабы - финал Сибайҙа уҙғарыласаҡ.

✓"Ҡағыҙға - икенсе ғүмер!" тәбиғәтте һаҡлау акцияһының сираттағы этабында Өфөнөң Калинин районы уҡыусылары тарафынан 14 тоннаға яҡын макулатура йыйылған. Был сарала Калинин районының 13 урта мәктәбе ҡатнашҡан. "Тәбиғәт" дәүләт унитар предприятиеһынан хәбәр итеүҙәренсә, "Ҡағыҙға - икенсе ғүмер!" эко-акцияһы һөҙөмтәһендә Өфөнөң Октябрь, Ленин, Дим, Совет, Киров, Калинин райондарында 100 тоннанан ашыу макулатура йыйылған, был 500-ҙән ашыу ағастың ғүмерен ҡотҡарыу тигән һүҙ. Ҡағыҙ сеймалын йыйыу буйынса һуңғы - йомғаҡлау эстафетаһын баш ҡаланың Орджоникидзе районы ҡабул итә.

✓Бөгөнгө көндә Башҡортостанда "Үҙ ағасыңды ултырт" бөтә Рәсәй акцияһы сиктәрендә 40 меңләп ағас ултыртылған. БР Урман хужалығы министрлығы ҡарамағындағы урман хужалыҡтары һәм дәүләт унитар предприятиеларынан тыш, был сарала урындағы халыҡ, шул иҫәптән студенттар һәм мәктәп уҡыусылары ла әүҙем ҡатнаша. Әлеге мәлдә ағас ултыртыу акцияһында 1300-ҙән ашыу кеше ҡатнашҡан.

✓Башҡортостандың дауалау-профилактика учреждениеларына талпандан тешләнгән 2649 кеше мөрәжәғәт иткән, тип хәбәр иттеләр Роспотребнадзорҙың республика идаралығында. Эпидемиологтар талпандар әүҙемләшеүен яҙҙың иртә һәм йылы килеүе менән бәйләй. Ғәҙәттә, талпандар күберәк май-июндә һөжүм итә. 1 апрелдән алып Башҡортостандағы Гигиена һәм эпидемилогия үҙәге лабораторияһы 1295 талпанды тикшергән, уларҙың 72-һендә энцефалит вирусы табылған.

"Башинформ"дан.

ИҒТИБАР: ФОТОКОНКУРС!

"АУЫЛДА - БАЙРАМ"

БЕҘҘЕҢ ЗАМАН ГЕРОЙЫ

31 майҙа "Өфө-Арена" спорт комплексы бокс яратыусылар өсөн ҙур байрам майҙанына әйләнәсәк. Нәҡ ошо көндә рингта EBU версияһы буйынса беренсе уртаса ауырлыҡтағы Европа чемпионы, IBO версияһы буйынса интерконтиненталь донъя чемпионы, WBA версияһы буйынса интерконтиненталь донъя чемпионы титулына дәғүә итеүсе Денис Шафиҡов һәм Европа чемпионы титулына дәғүә итеүсе Куба егете, ләкин Италия өсөн сығыш яһаусы Брунет Замора көс һынашасаҡ. Был көрәштәштәр өсөн икенсе осрашыу һәм нәҡ ошо алыш Европа чемпионы титулының артабанғы яҙмышын хәл итәсәк.

БАШҠОРТ СЫҢҒЫҘХАНЫ...

алышҡа әҙерләнә



Рингта Сыңғыҙхан исеме менән сығыш яһаусы, һәр алышҡа милли кейем - елән һәм ҡамсат бүректә сығыусы башҡорт егете, үҙенең көсө, таһыллығы, сослоғо менән бар донъяға билдәле Денис Шафиҡовты спорт донъяһына илтеүсе һуҡмаҡтың башы Миәс ҡалаһынан башлана. Мауығыу булараҡ ҡына башланған бокс менән шөғөлләнеү тора-бара уның яҙмышына әйләнә һәм профессиональ спортта ҙур еңеүҙәргә өлгәшеүгә алып килә. 2003 йылдан алып профессиональ рингта сығыш яһаған, WBC версияһы буйынса донъяның иң көслө ун боксеры исемлегенә индерелгән егет 28 алыш үткәрә һәм барыһында ла еңеү яулай. Еңеү уңышын спортсы былай тип аңлата: "Һәр алышҡа ла етди әҙерлек кәрәк, тик шул саҡта ғына еңеүгә өмөт итеп була. Боксёр, иң мөһиме, күнегеүҙәрҙе ҡалдырмаҫҡа һәм үҙе сығыш яһаған ауырлыҡ категорияһына ярашлы ауырлығын бер кимәлдә тоторға бурыслы. Ауырлыҡты тиҙ генә ташлау йәки, киреһенсә, йыйыу спортсының физик әҙерлегенә кире йоғонто яһай. Шулай уҡ ярышташыңдың техник алымдарын, уның үҙенсәлектәрен өйрәнеү һәм шуға ярашлы үҙенде әҙерләү ҙә мөһим фактор".

Өфөлә уҙасаҡ алышҡа ла Европа һәм Донъя чемпионы ҡаты әҙерләнә. Брунет Замораны ул "үҙе өсөн иң яйһыҙ ярышташ"ы булараҡ билдәләй һәм еңеү өсөн бөтә көсөн һаласағын белдерә. "Өфөлә уҙасаҡ көрәштә еңеү өсөн барлыҡ мөмкинлектәрем дә бар. Алыш алдынан үҙемдең физик әҙерлегемде, кәйефемде, кәрәкле ауырлығымды яҡшы яҡтан баһалайым. Психологик торошом да тотороҡло, эмоциональ йәһәттән дә көрәшкә әҙермен. Шулай уҡ көслө һәм үҙ эшенең профессионалы булған, Николай Валуевты бөтә донъяға билдәле иткән тренер Александр Зимин етәкселегендә шөғөлләнеүем дә үҙенең тос емештәрен бирер-ренә ышанам. Тағы ла тарихи тыуған яғымда, туғандарым, дуҫтарым, Өфө көйәрмәндәре алдында сығыш яһауым да миңә оло таяныс булып тора. Миңә күрһәтелгән ышаныҫты аҡлар өсөн бар көсөмдө һәм оҫталығымды һаласаҡмын", ти билдәле спортсы. Денистың көйәрмәндәре рәтендә шулай уҡ спортсылар Костя Цзю һәм Николай Валуевтың да булыуы көтөлә.

Донъя кимәлендә танылыу тапҡан спортсы оло еңеүҙәре хаҡында күп һөйләргә яратмай, ә төп иғтибарҙы буласаҡ алышҡа йүнәлтеүҙе хуп күрә. Ғөмүмән, күп һүҙ һөйләгәнсе, алдыңа ҡуйған маҡсаттарға өлгәшеү өсөн тырышыу һәм ошо юҫыҡта ныҡлы аҙымдар эшләү мөһимерәк, тигән фекерҙә Европа чемпионы.

ӘЙТКӘНДӘЙ...

Был көндә Өфөләге бокс майҙанында тағы ла биш профессиональ спортсының көрәшен ҡарау мөмкинлеге бар. Майҙанда Денис Шафиҡовтың яҡташтары Марат Хүзеев менән Константин Пономарев көс һынашасаҡ, ә еңелеү белмәҫ рәсәйлеләр Денис Царюк, Андрей Мерясев һәм фин Эдис Татли иһә Мексика һәм АҠШ-тың тәжрибәле боксёрҙарына ҡаршы торасаҡ. Ҙур спорт байрамынан һәм сағыу тамашанан ситтә ҡалмайыҡ.

Гөлназ САФУАНОВА.

БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Өфө янындағы йорттар һәм коттедждарға уртаса хаҡ квадрат метрына 29230 һумды тәшкил итә. Йыл башынан алып ул 18 процентҡа күтәрелгән. Һатыуға ҡуйылған бөтә йорттар буйынса тәҡдимдәрҙе ҡарап, иң арзан йорттоң - 170 меңгә (баҡсасылыҡ ширҡәттәрендәге дачалар), иң ҡыйбатлыһы 35 миллионға (евроремонт эшләнгән коттедж) һатылыуы билдәләнде. Күсемһеҙ милек агентлыҡтарының береһенең мәғлүмәттәренә ярашлы, ер участкаһына уртаса хаҡ бер сутыйына 36760 һумға тиң. Участкалар хаҡы төрлөсә: 35 меңгә лә, 15 миллион һумға ла тәҡдим ителгәндәре бар.

✓Адреслы программа сиктәрендә быйыл Өфөлә 47 күп фатирлы йортта капиталь ремонт үткәреү ҡаралған. Былтыр 39 торлаҡ йорт ремонтланған. Өфө хакимиәте башлығы урынбаҫары Альбина Йосопова әйтеүенсә, бөтә төр финанслау сығанаҡтары иҫәбенә йыл башынан алып торлаҡ фондында 52,3 млн һум суммаға капиталь ремонт эштәре башҡарылған. Был күрһәткес былтырғы ошо уҡ осорға ҡарата 11,3 процентҡа артҡан. Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүҙәр йыйыу 93 процент тәшкил иткән.

✓Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте бойороғо менән республиканың төбәк һәм муниципаль-ара әһәмиәттәге автомобиль юлдарында 2012 йылдың 4 июненән 31 августына ҡәҙәре көндөҙгө һауа температураһы 32 градустан артҡан осраҡта күсәренә төшкән ауырлыҡ Рәсәй Федерацияһы биләмәһендә билдәләнгән күрһәткестән артып киткән ауыр йөк ташыусы транспорт саралары хәрәкәтенә ваҡытлыса сикләү индерелә. Ауыр йөк ташыусы транспортҡа асфальт-бетон япмалы юлдарҙан йөрөү 22.00 сәғәттән 10.00 сәғәткә тиклем рөхсәт ителә.

✓Бөтә Рәсәй мәктәп уҡыусылары олимпиадаһының йомғаҡлау этабында Башҡортостандан 85 бала ҡатнашты - олимпиадалар 21 предмет буйынса үтте. Шуларҙың һигеҙе - еңеүсе, 22-һе призер исеменә лайыҡ булды, улар барыһы ла 9-11 класс уҡыусылары. Һәләтле уҡыусыларҙы тәбриклеү тантанаһы Өфөлә майҙың икенсе яртыһында үтәсәк.

✓ *Һәләтле балалар яҡшы шарттарҙа белем алһын, тиһәк, бөгөндән яңы бина төҙөү хәстәрлеген күреү кәрәк. Юғиһә, уҡыу процесын бер нисә йылға туҡтатып тороу лицейҙың уңышлы үҫешен юҡҡа сығарыу менән бер буласаҡ.*

БОРСОЛАБЫҘ!

ИҢ ҺӘЛӘТЛЕ БАЛАЛАР...

иң яҡшы бинаға лайыҡ!

Үткән аҙнала Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетының Милли мәғариф һәм фән буйынса комиссияһы Республика башҡорт лицей-интернатында күсмә ултырыш үткәрҙе. Быйылғы уҡыу йылы алдынан уҡыу корпусының ҡыйығы авария хәлендә тип табылыу сәбәпле, лицей уҡыусылары ҡаланың 5-се һөнәрселек училищеһы бинаһында белем алырға мәжбүр булғайны. Уҡыу йылы тамамланырҙан алда лицей-интернатты ваҡытлыса ябыу, уҡыусыларҙы башҡа мәктәптәр буйлап таратыу йәки райондарына кире ҡайтарыу тураһында хәбәрҙәр ишетелә башланы.

Был лицейҙың тарихы, уның милли мәғариф үҫешенә индергән өлөшө баһалап бөткөһөҙ. Инновацион белем биреү программаларын тормошҡа ашырыусы мәктәптәр араһында үткәрелгән Бөтөн Рәсәй конкурсы еңеүсеһе булған был уҡыу йортоноң егерме йыл ваҡыт эсендә өлгәшкән уңыштары бик тос, уҡыусылар ил генә түгел, халыҡ-ара кимәлдә үткәрелгән олимпиадаларҙа призлы урындар яулай, йыл һайын уҡыу йортон тамамлаусыларҙың 98 проценты уҡыуын юғары уҡыу йорттарында дауам итә. Уҡыу йортонда математика, физика, химия һәм информатика дәрестәре инглиз телендә алып барыла. Был уҡыусыларға төплө белем алырға ярҙам итә һәм сит ил вуздарында һөнәр алыу мөмкинлеге бирә. Лицейҙа белем биреүҙең ошо һәм башҡа үҙенсәлектәре башҡа уҡыу йорто менән "өйҙәш" булып көн итеүҙә ҙур ҡыйынлыҡтар тыуҙыра, икенсе сменала белем алыу һөҙөмтәһендә түңәрәктәр эше юҡҡа сыға. Шуға ла лицей етәкселеге уҡыу процесын икенсе корпуста һәм ятаҡтағы буш бүлмәләрҙә дауам итеүҙе файҙалыраҡ тип таба.

Республика башҡорт лицей-интернатының техник вуздар өсөн буласаҡ студенттар әҙерләүсе берҙәнбер дөйөм белем биреү учреждениеһы икәнен дә һыҙыҡ өҫтөнә алды ултырышта ҡатнашыусылар. Лицей директоры Фәнил Нуриев әйтеүенсә, уҡыусыларҙың 80 проценты техник йүнәлештәге юғары уҡыу йорттарына уҡырға инә. Уҡыусыларҙың башлыса аҙ тәьмин ителгән ғаиләләрҙән булыуын да иҫәпкә алһаҡ, республика ҡала һәм райондарында йәшәүсе һәләтле балалар өсөн был уҡыу йортоноң мөһимлеген һәм кәрәклеген аңларға булалыр, моғайын.

Республика властары лицейҙы һаҡлап ҡалыу өсөн ниндәйҙер эштәр башҡара, әлбиттә. 2012 йылда лицейҙың уҡыу корпусына үткәреләсәк реконструкцияның проект-тикшереү эштәренә бюждеттан 1,5 миллион һум аҡса бүленгән. Хәҙер тотош бинаға экспертиза талап ителә, сөнки бинаның бик иҫке булыуы сәбәпле, реконструкция менән генә проблеманы хәл итеп булмауы көн кеүек асыҡ, ти белгестәр. Әгәр был раҫланһа, яңы бина төҙөү мәсьәләһе килеп баҫасаҡ. Шуға ла Ҡоролтай ағзалары Республика башҡорт лицей-интернатына бөтөн стандарттарға яраҡлы яңы бина төҙөү тәҡдиме менән республика Президентына мөрәжәғәт итергә ҡарар итте. Әйткәндәй, БР Мәғариф министры Әлфис Ғаязов та был мәсьәләгә ыңғай ҡарауын һәм яңы бинаның Өфөнөң үҙәгендә төҙөү кәрәклеген билдәләгән. Республика төҙөүселәренең был йәһәттән тәжрибәһе бар, Р. Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатының, Ғ. Дәүләткилдеев исемендәге Республика һынлы сәнғәт гимназия-интернатының, Ғ. Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатының, Затондағы 5-се спорт профилендәге республика мәктәп-интернатының уҡыу корпустары ҡыҫҡа ваҡыт эсендә төҙөлдө һәм реконструкцияланды.

ШУЛАЙ ИТЕП...

Әлегә БР Мәғариф министрлығы лицей уҡыусыларына кире 5-се һөнәрселек училищеһы бинаһына ҡайтырға тәҡдим итә. "Бында һүҙ уҡыу йортон ябыу тураһында бармай. Ни тиһәң дә, ҡабул ителгән санитар һәм башҡа нормалар бар, балаларҙың сәләмәтлегенә зыян килмәһен өсөн улар яҡшы шарттарҙа уҡырға тейеш", - тине үҙенең сығышында БР Мәғариф министрлығының махсус белем биреү бүлеге етәксеһе Динә Йосоп ҡыҙы Шәрипова. Әммә был ваҡытлы сара менән проблема хәл ителмәй, яңы уҡыу йылы башланыу менән лицейҙы ваҡытлыса ябыу проблемаһы тағы ҡалҡып сыҡмаҫ, тип берәү ҙә ышандыра алмай. Етмәһә, Мәғариф министрлығында 2013 йылға 7-се класҡа балалар йыймай тороғоҙ, тигән тәҡдим дә әйткәндәр. Бынынһы инде, ысынлап та, лицейҙы юҡҡа сығарыуға беренсе аҙым булыр ине. Һәләтле балалар яҡшы шарттарҙа белем алһын, тиһәк, бөгөндән яңы бина төҙөү хәстәрлеген күреү кәрәк. Юғиһә, уҡыу процесын бер нисә йылға туҡтатып тороу лицейҙың уңышлы үҫешен юҡҡа сығарыу менән бер буласаҡ. Милләтте һәм балаларҙы ҡайғыртыуҙың бер хилафлығы ла юҡ, йәмәғәтселектең дә, ата-әсәләрҙең дә, лицейҙың сығарылыш уҡыусыларының да был йәһәттән фекере бер. Иң мөһиме, был лицей тарихы милли мәктәптәрҙе "оптималләштереү"ҙең башы булмаһын.

Ләйсән НАФИҠОВА.

ҺОРАУ - ЯУАП

ХАҠЛЫ ЯЛҒА СЫҠ ТА...

Республикабыҙҙа социаль туризм программаһы быйыл да эшләйәсәкме? Льготалы путевкалар кемдәргә бирелә?

- Социаль туризм быйыл да дауам итәсәк, өҫтәүенә, программаны финанслау ике тапҡырға - 70-75 млн һумға тиклем арттырыласаҡ. Тимәк, республикалағы 6 мең самаһы пенсионер һәм инвалид ял итеү мөмкинлеге аласаҡ. Маршруттар һәм түләү шарттары элеккесә: программала ҡатнашыусылар Башҡортостан буйлап сәйәхәт өсөн - 30, Рәсәй буйынса - 50, сит илгә путевка өсөн 70 процентын түләй, ҡалғаны урындағы бюджет иҫәбенә ҡапланасаҡ. Коляскаларҙа хәрәкәт итеүсе инвалидтарҙы һәм ғәрип балаларҙы оҙатып йөрөүсе кешеләр бөтә төр путевкаларға ла уның 30 процентын түләй. 2011 йылда ошо программа буйынса 2 988 кеше ял итте. Улар республика шифаханаларында, Урал буйлап турҙарҙа, Ҡаҙан һәм Санкт-Петербург, шулай уҡ Төркиәлә булып ҡайтты.

ЯРТЫ ХАҠҠА ТАШЛАМА

Ҡала яны электричкаларында йөрөгән пенсионерҙар ташлама менән файҙалана. Ә студенттарҙы ниңә оноталар?

- Электричка маршруттарында льготаға хоҡуғы булған 1-се категория граждандар, йәғни пенсионерҙар һәм хеҙмәт ветерандары ташлама менән йөрөй. Унан мәктәп уҡыусылары һәм студенттар, шулай уҡ электричкаларҙа ял көндәрендә йөрөүсе пассажирҙар ҙа ташламалы билеттарға эйә була ала. Бының өсөн барыу һәм ҡайтыу яҡтарына билет һатып алған осраҡта ул 50 процентҡа арзанырaҡҡа төшәсәк.

СҮП-САР - УЛ СЕЙМАЛ

Өфөлә сүп-сар йыйыуҙың айырым тәртибе булдырыласаҡ, тип ишеткәйнем, буш һүҙ булдымы әллә шул?

- БР Экология министрлығынан хәбәр итеүҙәренсә, сүп-сарҙы айырым туплау тәжрибәһен Өфөлә, Стәрлетамаҡта, Сибайҙа һәм Кушнаренкола башларға ҡарар ителде. Тәжрибә әлеге тораҡ пункттарының айырым микрорайондарында үткәреләсәк. Шуға ярашлы положение эшләнеп, ул муниципаль хакимиәттәргә ебәрелә. Сүп-сарҙы айырым туплау ҡалдыҡтарҙы икенсел сеймал сифатында файҙаланыу һәм махсус полигондарға сығарылыусы ҡый-һайҙы бер аҙ кәметеү мөмкинлеге бирәсәк. Бының менән бәйле борсолоуҙар урынһыҙ: ул тарифтар күләмендә сағылыш алмаясаҡ.

Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА әҙерләне.

Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы

Тамаҡ ауыртһа

Тамаҡҡа һырғанаҡ майы, лимон һуты, бал һөртөргә; муйынға иҙелгән һуған менән араҡы компресы ҡуйырға; сей кәбеҫтә япрағын бәйләргә - уны өс сәғәт һайын яңыртып тороу отошло; сөгөлдөр һуты менән тамаҡты сайҡау ҙа шифалы, һутҡа аҙыраҡ һеркә ҡушаһың; танауйотҡолоҡ мускулдарына күнегеү эшләйһең: 10-30 секунд телде шартлатырға, ауыҙҙы ҙур асып, "а"ны һуҙырға, тел осон аңҡау буйлап йөрөтөргә, телде сығарып, мөмкин тиклем аҫҡа һуҙырға. Күнегеүҙе 6 мәртәбә эшләргә.

Бөйөрҙө таҙалау

❖ Термосҡа бер ҡалаҡ етен орлоғо һалып, 1 стакан ҡайнар һыу ҡойорға һәм төнгөлөккә ҡалдырырға. Иртәнсәк тағы 1 стакан ҡайнар һыу өҫтәргә һәм шуны көнөнә 3 мәртәбә эсергә. 1 аҙна дауаланырға;

❖ етен орлоғон, ҡабаҡ орлоғон (тышы менән), һары мәтрүшкә үләнен бер тигеҙ өлөштәрҙә болғатырға, 4 ҡалаҡ ошо ҡатнашмаға 1 ҡалаҡ аҡ сәскә ҡушып, 0,5 л ҡайнаған һыуҙа 30-40 минут төнәтергә, һөҙөргә. Төнәтмәне 4 өлөшкә бүлергә, ашарҙан 1 сәғәт алда көн буйы эсеп бөтөргә;

❖ 3 ҡалаҡ ҡара ҡарағат япрағын 0,5л ҡайнар һыуҙа 15-20 минут төнәтергә. Япраҡтарҙы алып ташларға. Төнәтмәне ҡайнау хәленә килтерергә һәм уға 2 ҡалаҡ ҡарағат һалырға (туңған йәки кипкән) һәм төнәтергә. Көн буйы эсеп бөтөргә.

Организмды таҙартыу

Эштән, донъя мәшәкәттәренән арып, хәл бөтөп киткәндә дарыу ҡулланмай, үлән менән файҙаланыу яҡшы. 4 ҡалаҡ ҡыҙыл миләш, 3 ҡалаҡ гөлйемеш, 4 ҡалаҡ ҡара ҡарағат, 2 ҡалаҡ әрем (кипкәне лә ярай) алып, ярты литр ҡайнаған һыуҙа төнәтеп, һыуынғас һөҙәһең һәм көнөнә 3 мәртәбә ярты стакан эсәһең.

Һыу

Йән көйөүҙән һыу ҡотҡара. Умыртҡа бағанаһына, ашҡаҙан тураһына, аяҡҡулдарҙың бөгөлгән урындарына һалҡын һыуҙы ҡойорға, таҫтамал менән ныҡлап һөртөнөргә, йылыныу өсөн бер нисә күнегеү эшләргә. Ошо рәүешле даими ҡойоноу кәйефте күтәрә, тынысландыра. Йәй баҡсала ҡойонһаң, тағы ла шифалыраҡ.

Әнүәрә ХӘЙБУЛЛИНА.

✓ *Өйләнешергә тәкдимде кыҙҙар яһауы йәки кыҙҙың ата-әсәһе егеттең ҡолағына төшөрөү осраҡтары ла йышайҙы. Ҡатын-кыҙҙар артыҡ әүҙемләште, ә ир-егеттәр артыҡ һәлкәүгә әйләнде. Йүнлегә түгел инде был...*

РӘХМӘТЛЕ БУЛАЙЫҠ!

ҠОЯШ БАЙЫШЫНА БАРА...

ғүмерҙең ағыштары

Ошо һүҙҙәрҙе оло йәшкә еткән һәр кем әйтәлер. Әҙәм балаһы был яҡты донъяға тыуғас, бер генә тапҡыр бирелгән ҡәҙерле ғүмерен бик матур итеп үткәрһә ине лә бит, ләкин тормоштоң ҡаты елдауылдары уны төрлө һынауҙарға дусар итә.

Хәҙер һуғыш осоро балаларының иң кәсеһенә лә 75-80 йәш. Улар кисергән ғазап, аслыҡ, хәйерселекте яҙып та, һөйләп тә бөтөрөрлөк түгел. Һуғыштан һуң да байтаҡ йылдар ил халҡының көнитмеше еңелдән булманы. Талон буйынса икмәк, сәй, шәкәр алған саҡтар онотолмай. Үҙ һөнәрең менән эшләп пенсияға сығыу, көс түккән эшеңдең емешен татып йәшәү - бәхет. Ошо матур көнгә етә алмай, был яҡты донъя менән хушлашыусылар күп. Беҙҙең Ғафури районы Туғай ауылында Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашҡан һуңғы һуғыш ветеранының беҙҙең аранан китеүенә лә 9-10 йыл булды инде. Ауылда әлеге көндә 123 пенсионер иҫәпләнә, шуларҙың 44-е - ир заты, 79-ы ҡатын-ҡыҙҙар. Улар араһында мохтаж, ярлылыҡта йәшәгәндәре юҡ. Барыһына ла риза булып, зарланмайынса, матур итеп донъя көтәләр: ауыл халҡы тырыш һәм күндәм бит ул.

Ата-әсә өсөн балаларын тәрбиәләп үҫтереү үтә лә яуаплы һәм ауыр хеҙмәт. Башта уларҙы аяҡҡа баҫтыраһың, донъяһын бөтәйтәһең, унан һуң да ярҙамыңдан өҙмәйһең. Донъя мәшәҡәттәре менән ғүмер көҙөнә еткәндә инде байтаҡ һаулығыңды юғалтып өлгөргән булаһың. Өлкәнәйгән кеше кеше күп уйлай. Тормош юлында яҡындарын йәки ғәзиз балаһын юғалтыу ҡайғыһы кисергәндәрҙе лә уй, ғазап ташламай. Ни хәл итәһең, кеше ғүмере мәңгелек түгел, шуның өсөн дә ғүмерҙе тишек һауытҡа һалған һыу менән сағыштыралар. Пенсия йәшенә еткәндә кеше һаулығы ныҡ ҡаҡшаған була, бер үҙе ҡалып, яңғыҙ йәшәүселәр ҙә осрай. Бына ошо хәлдәрҙе белеп, күреп, хөкүмәтебеҙ һуңғы йылдарҙа халыҡ тормошо хаҡында арыу ғына хәстәрлек күрә башланы. Мәҫәлән, 80 йәшкә еткән пенсионерҙарҙың пенсиялары ныҡ ҡына арттырыла. Пенсионерҙарға юл йөрөү, билет һәм дарыу хаҡтарына ташламалар яһау, ҡарауһыҙ ҡалғандарҙы ҡарттар йортона урынлаштырыу, һуғыш яланында ятып ҡалған йәки ҡайтып үлгәндәрҙең тол ҡатындарына фатир биреү, уларҙы льготалы хаҡҡа ял йорттарына ебәреү, ярҙамсыһыҙ ҡалған пенсионерҙарға социаль хеҙмәткәр беркетеү кеүек күп социаль ярҙам саралары ҡаралған. Өлкән йәштәге, мөмкинлектәре сикләнгән кешеләр, ҡалала йәки ауылда йәшәһә лә, үҙен хәстәрләүҙәрен тойорға, уңайлы шарттарҙа көн итергә тейеш, тине Республикабыҙ Президенты ла. Хатта, пенсияға сыҡҡандан һуң белем алыу, яңы һөнәр үҙләштереү мөмкинлеге булдырылды. Хөкүмәтебеҙ халыҡ тормошон еңеләйтеү, яҡшыртыу өсөн яңынан-яңы указ, положениелар сығарып тора.

Тормошобоҙ тағы ла матурыраҡ, байыраҡ була бара, пенсияларыбыҙ алдағы көндәрҙә лә артыу өҫтөндә, магазиндарҙа бөтә ризыҡ бар, яҡшы он, фуражды машина менән ҡапҡа төбөнә килтереп һалалар. Тик донъялар ғына имен-аман, тыныс булһын, һуғыштар булмаһын, тибеҙ. Үҙебеҙҙең ғүмерҙәребеҙ ҡояш балҡышына барһа ла, көндәребеҙ аяҙ, киләсәгебеҙ яҡты һәм шатлыҡлы булһа ине, тиҙәр ауыл пенсионерҙары.

Әминә ВАХИТОВА,
мәғариф ветераны, пенсионер.

АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

"В Контакте" социаль селтәрендә бер йәш ҡыҙ: "Бөгөнгө егеттәр шундайға әйләнде: уларға ҡыҙҙар беренсе булып шылтыратa, яҙа, урамда йөрөп килергә саҡыра..." тип яҙған һәм байтаҡ гүзәл зат уға ҡушылып үҙ яҙмаһын ҡалдырған. Был фекер әңгәмәгә ҡушылған барыһына ла оҡшаған, уның менән тулыһынса килешеүҙәрен һәм хуплауҙарын белдергәндәр. Тик шуныһы: үҙҙәре шылтыратып, осрашыуға саҡырып, заман егеттәрен кәмһетеп, үҙҙәрен шундай шәп итеп күрһәтергә ынтылыуымы был гүзәл заттарҙың?

ҠАРТАЙЫУ...

йәштәрҙе аңламауҙан башлана, тиҙәр

Яңыраҡ автобус туҡталышында шундай һөйләшеүгә шаһит булғайным. 19-21 йәштәрҙәге бер ҡыҙ ныҡышып-ныҡышып егетен осрашыуға саҡырҙы. "Ярты сәғәт кенә ваҡытыңды бүл инде, - тип инәлде ул.- Беҙгә күптән аңлашырға ваҡыт... Билдәһеҙлектә йөрөүҙән арыным... Теләһәң, такси менән үҙем елдереп кенә килеп етермен... Кире генә ҡаҡма". Бер аҙ паузанан һуң ҡыҙ тағы ялбарҙы: "Теләһәң, мин бер нәмә лә өндәшмәҫмен, һин һөйләгәнде генә тыңлармын. Бер нәмә лә һөйләшмәй, һинең эргәңдә саҡ ҡына торорға ла ризамын. Бөгөн урамға сығырға ваҡытың булмаһа, әйҙә һуң, иртәгә осрашайыҡ. Нисәлә булһа ла шылтырат. Һин тигәндә, мине беләһең бит инде..." Һөйләшеп бөткәс, телефонына ҡарап ултырҙы ла, смс яҙа башланы. Әле һөйләшкән егетенә нисек яратыуын белдереп хәбәр ебәргәндер, тип уйлап та өлгөрмәнем, йәнә шылтырата башланы. Яуап яҙмауының сәбәбен төпсөндө, араларында берәй ҡыҙ барлығына шикләнде, әгәр кемдер була ҡалһа, икегеҙ ҙә минән изгелек көтмәгеҙ тип янаны хатта.

- Егетең менән шулай һөйләшәһеңме? - тинем, ҡыҙыҡһыныуымды еңә алмай.

- Ә нисек һөйләшергә һуң бөгөнгө егеттәр менән? - тип һорауға һорау менән яуап бирҙе ҡыҙыҡай.

Шунан ул егете менән мәктәп эскәмйәһенән дуҫлашып йөрөүҙәрен, һуңғы ике йылда яҙылышмай ғына бергә йәшәүҙәрен әйтте. "Өйләнешеү тураһында һүҙ ҡатмағас, үҙем башлағайным, ҡурҡты ла ҡуйҙы. Тәүҙә уйларға кәрәк, тине, һуңғараҡ ғаилә ҡорорға әҙер түгеллеген әйтте. Бер аҙҙан бөтөнләй юҡҡа сыҡты, осрашыу түгел, телефондан һөйләшергә лә ҡурҡа. Һуңғы ике аҙнала бөгөн беренсе тапҡыр телефоны яуап бирҙе" - күңелендәген кемгәлер бушатҡыһы килеп ултырған, буғай, ҡыҙ бер тынала үҙ хәлен һөйләп бирҙе лә, кинәт кенә "Аптырайһығыҙмы бөгөнгө егеттәргә?" тип һорап ҡуйҙы. Яуапты ишетергә тура килмәне уға - оҙаҡ көттөргән автобус килде.

Мин иһә әлеге ҡарар күҙгә һөймәлекле, зифа буйлы, зауыҡ менән кейенгән ҡыҙҙың үҙенә ғәжәп иттем. Йәше лә үтеп барған һымаҡ түгел, ә шул тиклем ниңә инәлә һуң ул егеткә? Шул ҡәҙәр кейәүгә сыҡҡыһы, ғаилә ҡорғоһо киләме? Ә һөйләшеүе нисек! Шулайтырмын-былайтырмын тип янауы - бер, яман итеп һүгенеүен әйт әле, ҡырҡып ташлаһаң, телен эт еймәҫ. Килмәһең, үҙем барам, тиеүенә тағы нисек аптырамаҫһың.

Район ауылдарында йөрөгәндә өйләнмәй йөрөгән улы булған бер апай көлөп һөйләп торғайны: "Ни эшләп өйләнһен инде ул хәҙер. Урамға сыҡһа, ҡыҙҙар үҙҙәре оҙатып килә. Ҡунырға ҡалырға ла инәлтеп тормайҙар. Уның йөрәген яулар өсөн ауыл ҡыҙҙары хатта һуғышып та бөттө. Ыраһын-тәмәкеһен алалар, алып сығып китәләр, иплерәк, тәртиплерәк ҡыҙҙарҙың артынан китмәһендәр өсөн өйгә тиклем оҙатып ҡуялар,- көлһә лә, йәне көйгәне күренеп тора әсәһең. - Өйлән дә ҡуй шуларҙың береһенә, тиһәм, һөйләшеп ҡуйҙығыҙмы әллә, кисә Зилә лә миңә, өйләнешәйекме әллә, тип тәҡдим яһаны, ти..."

Егеттәрҙең тубыҡланып, сәскә гөлләмәһе һәм никах балдағын һуҙып: "Кейәүгә сығырға ризаһыңмы?" - тип, ҡыҙҙың ҡулын һораған тантаналы мәлдәр быуаттар артында ҡалдымы әллә? Өйләнешергә тәҡдимде ҡыҙҙар яһауы йәки ҡыҙҙың ата-әсәһе егеттең ҡолағына төшөрөү осраҡтары ла йышайҙы. Бында, әлбиттә, ҡыҙҙарҙы шелтәләп, ә егеттәрҙе, киреһенсә, яҡлап булмай. Атта ла, тәртәлә лә бар, тигән һымаҡ, был осраҡта ҡыҙҙар ҙа, егеттәр ҙә ғәйепле. Ҡатын-ҡыҙҙар артыҡ әүҙемләште, ә ир-егеттәр артыҡ һәлкәүгә әйләнде. Йүнлегә түгел инде был...

Бынан тиҫтә йыл элек үҙәк матбуғаттың береһендә ошондайыраҡ темаға мәҡәлә уҡығайным. Илле-алтмыш йылдан ҡатын-ҡыҙ ҙа, ир-егет тә биологик, физик һәм әхлаҡи йәһәттән ҙур үҙгәреш кисерә, тиелә ине унда. Гүзәл заттар физик яҡтан ирҙәргә ҡарағанда көслөрәк буласаҡ, иҡтисадтың бөтөн тармағында ла алдынғы позицияны биләйәсәк, бөгөнгө көслө зат алып барған бурыстарҙы үҙ ҡулына аласаҡ, тышҡы ҡиәфәтенә иғтибар итмәйәсәк, үҙҙәрен ирҙәр һымаҡ тотасаҡ. Ә ир-егет, киреһенсә, көсһөҙ заттың күләгәһенә ышыҡланып ҡына ҡалмай, физик йәһәттән дә ҡалышасаҡ, ауыр, физик көс талап ителгән эшкә барымдары булмаясаҡ. Улар бөгөнгө ҡатын-ҡыҙ кеүек үҙҙәренең кейеменә, төҫ-башына, тышҡы йөҙөнә ныҡ иғтибарлы буласаҡ, косметика ҡуллана-саҡ, төрлө биҙәүестәр тағасаҡ, тиелә ине унда. Бының менән генә бөтмәй әле. Иң ҡурҡынысы шунда: улар ҡаршы енестәге зат менән ҡыҙыҡһыныуҙан туҡтаясаҡ. Шул сәбәпле, өйләнешеп, ғаилә ҡороусылар һирәгәйәсәк. Ҡатын-ҡыҙ ир-егеттең артынан сабып йөрөп, бала табыу маҡсатына ирешәсәк, тигән мәғәнә һалынған ине унда. Шул дәүергә етеп барабыҙ һымаҡ тойолмаймы һеҙгә?

Кемдер, бәлки, минең менән килешмәҫ тә, иллә-мәгәр миңә, ысынлап та, шул заман яҡыная кеүек. Яңыраҡ көнкүреш техникаһы магазинында булған һөйләшеү менән дәлилләп ҡуйғым килә был фекеремде. Тауар кәштәләре араһында йөрөгән консультант егеттән үтектең функциялары менән таныштырыуын үтенгәйнем, нигеҙле генә бер нәмә лә һөйләй алманы, ярҙамға саҡырған ҡыҙ яҡшылап аңлатып бирҙе. Уның ҡарауы, егет сәс турайта торған әйбер хаҡында, әйткәндәй, уны ла үтек тиҙәр, шундай тәфсирләп һөйләне, ниндәй төрҙәре, сифаты, зыяны тураһында тулы мәғлүмәт бирҙе, ышандырырлыҡ булһын өсөн хатта үҙенең ҡулланыуын да йәшермәне.

Ҡартайыу йәштәрҙе аңламауҙан башлана, тиҙәр, бәлки, ҡартаям ғыналыр, уларҙы аңларға тырышмайымдыр, юҡҡа ғына был күренешкә иғтибарҙы көсәйтә торғанмындыр. Һеҙ нисек уйлайһығыҙ, йәмәғәт, фекерҙәрегеҙ менән уртаҡлашығыҙ әле, зинһар.

Лена АБДРАХМАНОВА.
Мәләүез ҡалаһы.

МӨСОЛМАН ӘҘӘБЕ

НАМАҘ ҠЫЛЫУСЫНЫҢ...

алдынан үтмә

Бәйғәмбәребеҙ (саллаллаһу ғәләйһи үә сәлләм) әйткән: "Намаҙ уҡып ултырыусы алдынан үтеп киткән кеше үҙенең ниндәй ҙур гонаһ ҡылғанын белһә, доға уҡыуҙың тамамланыуын 40 көн көтөргә лә әҙер булыр ине".

Был гонаһ тураһында бөтә хәҙистәрҙә лә әйтелә. Башҡалар был хатаны ҡылмаһын өсөн иманлы кеше үҙе лә хәстәрлек күрергә бурыслы. Намаҙ уҡырға йыйынғанда, ул ултырған урынды ситләп үтһендәр өсөн, алдына берәй әйбер һалып ҡуйырға мөмкин. Кеше намаҙ ҡылыусы алдынан үткәнен һиҙмәй йә был ҡылыҡтың гонаһ икәнен белмәй икән, эргәһендә булған мосолмандар уны иҫкәртергә тейеш. Уның юлын ҡыйып, "Собханаллаһ" тип әйтергә кәрәк. Был талап намаҙ ҡайҙа уҡылыуға ҡарамаҫтан - асыҡ һауаламы, мәсеттә, башҡа урындамы - үтәлергә тейеш. Намаҙ ҡылыусы ҡарашын сәждә урынына төбәргә һәм ян-яҡҡа ҡарамаҫҡа тейеш. Сит тауыштар иһә иманлының тыныслығын боҙа һәм Аллаһ менән аралашырға ҡамасаулай. Шуға гонаһ намаҙ ҡылыусыны борсоған кешегә яҙыла.

✓ *Уның китабы төплө, тарихи нигеҙле булып, архив сығанаҡтарына, документтарға һылтанып яҙылған. Китапты кемдер тәнҡитләп маташа икән, тәнҡит һүҙе әйтер алдынан ул үҙе ошо архивтарҙы өйрәнгән булырға тейеш.*

ТАРИХЫҢДАН ДАН ТАП!

ШӘЖӘРӘ БАШЫНДА...

Ҡандр бей тора

Ошо көндәрҙә Илеш районында оло ваҡиға булды - белеме буйынса инженер-механик һөнәрле Фидан Мәрүәровтың "Иҫке Күктау ауылы тарихы. Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары шәжәрәһе" китабының исем туйы үтте. Автор был китапты әҙерләүгә ике тиҫтә йыл самаһы ғүмерен сарыф иткән, ошо ваҡыт арауығында тәүсығанаҡтар, тарихи документтар менән эшләгән.

Самат ҠОТЛОЕВ фотоһы.

Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарының шәжәрәһендә төп урынды 1993 йылда табылған ғәрәп графикаһында яҙылған шәжәрә алып тора. Шәжәрәне Ғәбделсаттар Мөслим улы яҙған, уның яҙмаларының артҡы яғында уға һуңғы яҙыуҙы индереү датаһы һәм кем яҙғанлығы теркәлгән: "1912 йылда мартҡың 28-се көнөндә тамам булды, рәбиғел ахырҙың 23-сө көнөндә шаршамбы көн тамам булды, шәжәрәне яҙыусы Ғәбделнасир Мөхәмәтсадиҡ улы тип уҡырһығыҙ. 1330 Һижри йыл". Был юлдарҙы яҙыусы Ғәбделсаттар Мөслим улы яҙғанды дауам иткән.

Шәжәрәлә: *"Ҡандр-бей, ағасың һандал булһын,*

Ораның арнау булһын,

Тамғаң һүмес булһын,

Ҡошоң күгәрсен булһын", - тигән юлдар ҙа бар. Ҡандр-бей - шәжәрәнең башында тороусы. Ә атрибуттарҙы уға Алтын Урҙа хандары әйтеп ҡалдырған, тигән фекер йәшәй. Шәжәрәлә XIV-XV быуаттарҙан алып XX быуатҡа тиклем 17 быуын яҙылған. Авторҙың тынғыһыҙ эҙләнеүҙәре һөҙөмтәһендә бөгөн уның ҡайһы бер тармаҡтары 22 быуынға еткерелгән.

Сарала ҡатнашыусылар, Фидан Садиҡ улының ауылдаштары китап буйынса үҙҙәренең фекерҙәре менән уртаҡлашты, уның баһалап бөткөһөҙ әһәмиәтен билдәләне. Китаптың исем туйында, Өфө ҡунаҡтарын иҫәпкә алмағанда, бер генә башҡорт һүҙе ишетелмәһә лә, ҡан хәтере барыбер тамырҙарҙы юллата, милли рух тынғылыҡ бирмәй, күңел төпкөлөндә баҙлаған ҡуҙҙы яндырырға тырыша. Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарының үҙ шәжәрәһен тергеҙеүе, тамырҙарын юллауы - милләттең тергеҙелеүенә табан яһалған аҙымдарҙың береһелер ул, моғайын.

Фидан МӘРҮӘНОВ, "Иҫке Күктау ауылы тарихы. Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары шәжәрәһе" китабы авторы: Ауыл тарихы, һыу-ер атамалары, нәҫел ептәре һәр кемде ҡыҙыҡһындыралыр. Шәжәрә менән танышыу теләге миндә күптән тыуҙы. Быға тәүге орлоҡ бала саҡта уҡ һалынғандыр, моғайын. Өйҙә атай-әсәй ҡайһы ваҡыт һүҙ араһында ауылдағы кешеләрҙең туғанлығы, нәҫелнәсәп тураһында бәхәсләшеп алырҙар ине. 1993 йылда ҡулыма Әнүәр Әсфәндийәровтың "Башҡортостан ауылдары тарихы" тип аталған китабы килеп эләкте. Шунан уҡып, беҙҙең нәҫел башы Ғайсарҙың XIX быуат башында хәрби хеҙмәттә булған ейәндәренең дә исеме килеп сыҡты. Шул йылдарҙа Әнүәр Закир улының Башҡортостан телевидениеһы аша бик ҡыҙыҡлы "Шәжәрә" тапшырыуы донъя күрҙе. Һуңынан инде республиканың төрлө төбәктәрендә ауылдар тарихын китап итеп яҙыуҙары тураһында хәбәрҙәр ишетелә башланы. Былар барыһы ла миңә ауыл шәжәрәһе һәм тарихы менән шөғөлләнергә этәргес бирҙе. Өҫтәүенә, ауылыбыҙҙың ғәрәп графикаһында яҙылған шәжәрәһе табылды. Ул яҙыу Стәрлетамаҡ пединститутында уҡытҡан ауылдашым Илшат Насиповта булып сыҡты. Уны алып ҡайтып, өйрәнә башланым. Бер туған ағайым ғәрәп телен яҡшы ғына белә ине, ул вафат булып ҡалғас, 1993 йылда Түбәнге Йәркәйҙә йәшәгән 90 йәшлек Мәүлүфә Сәлихова абыстайҙан уҡыттым. Ғалимдарға, телселәргә мөрәжәғәт иттем. Шәжәрә насар һаҡланыуы һәм XX быуатта дауам ителмәүе сәбәпле, был бушлыҡты ауылдаштарым, оло йәштәге кешеләрҙән һорашып, белешеп, йорт һайын йөрөп, Башҡортостан Республикаһының Дәүләт тарих архивында материалдар туплап, тулыландырҙым. Һөҙөмтәлә Иҫке Күктау ауылының 22 быуынын торған шәжәрәһе барлыҡҡа килде. Шулай уҡ ҡырғыҙ ырыуына ингән ауылдар барлығы ла асыҡланды. Был шәжәрәлә "ҡырғыҙ йәмәғәттәребеҙҙең" (халҡыбыҙ мәғәнәһендә), "ҡырғыҙ еребеҙгә" тигән һүҙҙәр осрай. Был инде ата-бабаларыбыҙҙың ҡырғыҙ ырыуына ҡарағанын раҫлай. Ошоно раҫлау өсөн тарихҡа инеп китергә тура килде.

Борон ер бүлеү мәсьәләһе халыҡ өсөн бик мөһим булып торған. Уны хәл иткәндә төп документ булып шәжәрә иҫәпләнгән. Ир-аттарҙың ер эшкәртеп, хужалыҡты алып барыусы булыуы, һалымдарҙың уларҙың һанына ҡарап йыйылыуы арҡаһында шәжәрәләргә ир-аттар ғына яҙылып барған. Яҡын ҡәрҙәштәрҙең никахҡа инеүе булмаһын өсөн ҡоҙа булышыусылар ете быуынына тиклем нәҫелен белергә тейеш булған. Бөгөн был пунктар, бәлки, бер ни тиклем үҙенең актуаллеген юғалтҡандыр ҙа, әммә милләтеңдә, туғандарыңды, ҡәрҙәштәреңдә, нәҫеленде белеү - һәр кемгә лә кәрәктер тип уйлайым, йән тартмаһа ла, ҡан тарта, тигән халыҡ мәҡәле юҡтан ғына сыҡмаған. Шәжәрәне өйрәнеү - ул үҙ тарихыңды өйрәнеү. Ошо йәһәттән шәжәрә үҙенең әһәмиәтен бөгөн дә юғалтмаған, тип уйлайым.

Миңлеғәле НӘҘЕРҒОЛОВ, филология фәндәре докторы: "Иҫке Күктау ауылы тарихы. Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары шәжәрәһе" - ябай китап түгел. Ул халыҡ өсөн кәрәкле китап. Фидан Садиҡ улы менән күптән танышмын һәм ул күп ғүмерен ошо китапҡа бағышланы. Үҙ аҡсаһына Өфөгә йөрөнө, архивтарҙа соҡондо, фәнни китаптар эҙләне. Шуға ла уның китабы төплө, тарихи нигеҙле булып, архив сығанаҡтарына, документтарға һылтанып яҙылған. Китапты кемдер тәнҡитләп маташа икән, тәнҡит һүҙе әйтер алдынан ул үҙе ошо архивтарҙы өйрәнгән булырға тейеш.

Был китап тураһында мин "Ҡызыл таң" гәзитенә мәҡәлә яҙып, "Ата-бабалар рухына оло һөйкәл" тип атаным. Гәзит, моғайын, үҙенең Башҡортостанда нәшер ителгәнен, күп уҡыусыларының төньяҡ-көнбайыш диалектында һөйләшеүсе башҡорттар икәнен оноталыр. Ошо мәҡәләләге "ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары шәжәрәһе", "башҡорт шәжәрәләре" тип яҙылған урындарҙың барыһын да төшөрөп ҡалдырып, күпкә ҡыҫҡартып баҫтырҙылар. Был, әлбиттә, беҙҙең тарихҡа, беҙҙең үткәндәргә аяҡ салырға маташыу.

Рудоль ӘҮСӘХОВ, Башҡортостандың атҡаҙанған архитекторы (тел-стиль үҙенсәлеге һаҡланды- **Авт.):** Бөгөн ата-бабаларыбыҙны иҫкә алабыҙ, шуға күрә башҡортса һөйләшһәк, моғайын, насар булмаҫ. Илеш районында башҡортса һөйләшә белгән кешеләр бар икән, тигән фекер ҡалһын, тип, һүҙемде башҡортса әйтергә булдым. Үҙем Өфө ҡалаһында, башҡорттар менән дуҫ булып, аралашып, башҡорт теленә ғашиҡ булып йәшәйем.

Китапҡа ингән тарихи материалдар беҙнең бәләкәй саҡта атайларҙан, ҡартатайларҙан ишеткәнне - башҡорт булыуыбыҙҙы фәнни кимәлдә иҫбатлай. Шуға күрә бөгөнгө көндә беҙнең был фекер миф булып ҡына ҡалмай, ә фәнни иҫбатланған дәлил булып тора. Фидан яҡташ, замандаш беҙнең ҡәрҙәшләребеҙ өсөн химиктарға Менделеев асышы кеүек хеҙмәт бүләк итте. Бөтөн быуындарҙы быуыны-быуыны менән асыҡлап, рәткә ҡуйып, быуыннарның мөнәсәбәте нисек булыуын аңлата ул беҙгә. Шуға күрә лә уның хеҙмәте баһаһыҙ. Һәр мәҙәни, яҡтыға ынтылған кеше белемгә ынтылырға тейеш. Һәр мәҙәни кешенең китап кәштәһендә "Ҡөрьән"дән, башҡа дини китаптарҙан башҡа, Ризаитдин Фәхретдиновтың, Аҡмулланың, Зәки Вәлидиҙең китаплары булырға тейеш. Шул китаптарны уҡып, беҙнең халыҡтың ҡайҙан килгәнен, тарих белән бәйләнешен белеп йәшәгәндә генә үткәндәрне, бөгөнгөнө аңлап йәшәп була.

Беҙнең Илеш районында башҡорт-татар темаһы әле лә, бөгөн дә бәхәсле. Кешене көсләп башҡорт итеп тә, татар итеп тә булмай. Ул һәр кешенең үҙ ихтыярында. Ә ҡанбабаларыбыҙны, уларҙың кем булғанын белеү - милләтеңде белеү өсөн иң кәрәк нәмә. Ернең ҡатламнарын тикшереүсе ғалимнар бар. Миллионлаған, миллиардлаған йылдар килгән ҡатламнарны белмәйенсә, шул ер өҫтөнә, сүп-сар өҫтөнә йорт һалып ҡуйып булмай. Сөнки сүп-сар өҫтөнә һалынған йорттар емерелә. Шуға күрә тарихны белеү, хәкиҡәтте белеү йорт нигеҙен дөрөҫ урынға һалғанға тиң ул.

Зәйтүнә ӘЙЛЕ.

БАШҠОРТ ҠАМУСЫ

ҠЫРҒЫҘ ЫРЫУЫ БАШҠОРТТАРЫ

Рус ғалимы Сергей Руденко боронғо башҡорттар араһында һан яғынан күп булмаған ҡырғыҙҙар ҙа бар, тип яҙған. Этнограф Раил Кузеев уның фекерен үҫтереп, ҡырғыҙ башҡорттары - боронғо Енисей ҡырғыҙҙарының тоҡомдары, тип иҫәпләгән. Улар Енисей йылғаһының өҫкө ағымы буйҙарында, Тянь-Шань тауҙары итәктәрендә йәшәгән. Совет энциклопедияһында: "Енисей ҡырғыҙҙары беҙҙең эраға тиклем II быуаттан беҙҙең эраның XVIII быуатына тиклем Минусин ҡаҙанлығында йәшәгән боронғо төрки телле халыҡ... 1209 йылда Сыңғыҙхан тарафынан яулап алынған", - тиелгән. Шуға тиклем бер ҡәбилә булып йәшәгән Ҡырғыҙ ҡағанаты тарҡалған һәм уның бер ырыуы айырылып, бәлки, татар-монголдар ғәскәрендә, Урта Азияға Һырдарья йылғаһы буйына үткән. Һырдарья буйында улар уғыҙҙар конфедерацияһына ингән.

Яҙыусы һәм тарихсы Лев Гумилев үҙ әҫәрҙәрендә Енисей ҡырғыҙҙарының ул ваҡыттарҙа уҡ юғары мәҙәниәткә эйә булғанлығы тураһында яҙа. Ул уларҙы, оҙон буйлы, зәңгәр күҙле, һары сәсле булғандар, тип тасуирлай. "...Был ерҙәр шуның өсөн дә иҫ киткес матур, сөнки бындағы халыҡ бик һирәк осрай: бында командар, йәғни ҡыпсаҡтар, ҡыпсаҡтарҙың Көнбайыш тармағы булған динлиндарҙың вариҫтары йәшәй. Динлиндарҙың туранан-тура вариҫтары - Енисей ҡырғыҙҙары ундырышлы Минусин ҡаҙанлығында йәшәүҙәрен дауам итә, ер эшкәртә, ултыраҡ малсылыҡ менән шөғөлләнә. Улар ата-бабаларының бай мәҙәни мираҫын һаҡлай, әммә IX быуатта Бөйөк дала киңлектәрен яулаған хәрби-лектәренән баш тарта. Хәҙер уларҙан көньяҡҡа табан монголдарҙың күп һанлы ойрот ҡәбиләһе урынлашҡан" (Л. Гумилев "Древняя Русь и Великая степь"). Бында шуны аңлатып китеү урынлы булыр: динлиндар - Ҡытай сығанаҡтары буйынса ҡыпсаҡтарҙың атамаһы, командар -ҡыпсаҡтар.

Ул дәүерҙә Арал диңгеҙе буйҙарында бик күп төрки халыҡтар йәшәгән. Шул уҡ ерҙә йәшәгән ҡыпсаҡ ҡәбиләләре XIV-XV быуат сигендә Бөгөлмә ҡалҡыулығына үтә. Улар менән бергә йылан, гәрә, ҡырғыҙ, елдәк, ҡанлы, ҡаршын ҡәбиләләре лә була. XV быуатта нуғайҙар баҫымы аҫтында улар төньяҡҡа - Ағиҙел йылғаһының түбән ағымына, Сөн, Баҙы, Танып йылғалары буйҙарына күсенеп йәшәй башлай. Ҡырғыҙ ырыуы башҡорттарының Башҡортостанға килеп төпләнеп йәшәй башлаған урынында Ҡырғыҙ ауылы барлыҡҡа килә. 1662-1664 йылдарҙа булған ихтилалдар ваҡытында был ауыл яндырыла, халыҡ унан күсенеп, икенсе ауылдарға нигеҙ һала. Бөгөн ҡырғыҙ ырыуы башҡорттары хәҙерге Нефтекама ҡалаһының эргәһенән башланып, Краснокама, Илеш, Баҡалы, Шаран, Туймазы һәм күрше Татарстандың Аҡтаныш, Баулы, Ютазы, Лениногорск, Әлмәт, Аҙнаҡай райондарының төрлө ҙурлыҡтағы территорияһында йәшәй.

Фидан МӘРҮӘРОВ.

Һуңғы йылдарҙа кешелеккә ҙур афәт булып янаған иҫкәртеүҙәрҙең икеһе һыуға бәйле. Тәүгеһе - климат йылыныуы арҡаһында боҙлоҡтарҙың иреүе һәм Туфан һыуы ҡалҡыуы, икенсеһе - эсәр һыуҙарҙың кәмеүе арҡаһында кешелектең һыуға сарсау ихтималлығы. Был хәлдәр барыһы ла боронғоларҙың "Тереклек һыуҙан яралған һәм һыу арҡаһында һәләк буласаҡ" тигән һүҙҙәрен раҫлап торғандай. Шул тиклем үк аянысһымы икән ни һыуға бәйле яҙмышыбыҙ? Башҡортостанда 600-ләгән ҙур һәм бәләкәй йылғалар, ун меңдән ашыу шишмәләр һәм инештәр була тороп та, беҙ ни өсөн йылдан-йыл сарсауға нығыраҡ дусар ителәбеҙ? Һыу проблемаһы ваҡытлыса ғына күренешме, әллә беҙ ҡотолғоһоҙлоҡ һаҙлығына бата барабыҙмы? Ошо һәм башҡа һорауҙарға география фәндәре кандидаты, Башҡорт дәүләт университетының география факультеты деканы Инбер Мөхәмәт улы ЯППАРОВ һәм Ағиҙел һәм Урал йылғалары һыу объекттары мониторингы буйынса Федераль дәүләт учреждениеһының бүлек мөдире Әхтәм Рауил улы ҒӘББӘСОВ менән яуаптар эҙләйбеҙ.

ҺЫУҢАЙЫМ,

Үҙем һыу

Кешелек иң ҙур өлөшө һыу менән ҡапланған Ерҙә йәшәһә лә, асылда, донъя океанының уртаһында ултырһа ла, XXI быуат башында һыу ҡытлығы барлыҡҡа килде. Һыу проблемаһына мөнәсәбәтле белгестәр булараҡ, һеҙ был ҡытлыҡтың сәбәптәрен нисек аңлатаһығыҙ? Ғөмүмән, һеҙҙең һыуға мөнәсәбәтегеҙ нисек?

Ә. ҒӘББӘСОВ: Бигерәк тә 2010 йылда Башҡортостан был ҡытлыҡты нығыраҡ кисерҙе. Гидрогеологтарҙың әйтеүе буйынса, Башҡортостанда ер аҫты һыуҙары 2-4 метрға түбәнгә төштө. Былтыр, мәҫәлән, был кимәл күтәрелде, уртаса алғанда күтәрелеш 30 сантиметрға тиң булды. Ғалимдар һыу кимәле түбәнәйеүенең биш йылға һуҙылырын күҙаллай. Быйыл, бер ҡасан да булмағанса, апрелдә үк ҡояш ҡыҙҙыра башланы, тимәк, был һыу кимәленең тағы ла түбәнәйеүенә килтерәсәк. Быға тиклем беҙ, бигерәк тә ауыл ерендә йәшәүселәр, һыуҙы ҡоҙоҡтарҙан ала инек. Йылдан-йыл ҡоҙоҡтарҙа ла һыу ҡалмай башланы. Мин үҙем, мәҫәлән, баҡсамда 7 метрҙан һыу ала инем, хәҙер ҡоҙоғомдоң тәрәнлеге 11 метр.

И. ЯППАРОВ: Һыу - тормошобоҙоҙоң нигеҙе. Һыуһыҙ бер нәмә лә эшләп булмай. Әгәр ҙә Хоҙай Тәғәлә беҙгә шул һыуҙы биргән икән, беҙ уның ҡәҙерен белергә, һыуға ҡарашыбыҙҙы үҙгәртергә бурыслы. Һыу өс хәлдә була: ҡаты (боҙ), шыйыҡ һәм пар хәлендә. Һыу ошо өс хәлгә күскән ваҡытта йылылыҡ бүлеп сығара һәм таҙара. Беҙ бөгөн һыуҙың ана шул таҙарған өлөшөн һаҡлау мәсьәләһен күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Атмосферала барлыҡ һыуҙың 7 проценты бар икән, тимәк, 14 йыл һайын бер үк һыу атмосфера аша ергә төшә. Әгәр ҙә беҙ ана шул ваҡыт эсендә кешенең һыуға мөнәсәбәтен үҙгәртеп өлгөрһәк, киләсәктә эсәр һыу проблемаһы булмаясаҡ.

Тәбиғәт законы буйынса 1 тонна органик матдәне етештереү өсөн яҡынса 400 тонна һыу ҡулланыла. Әйтәйек, 1 тонна бойҙай үҫтереү өсөн тәбиғәт 400 тонна һыу бүлә. Ә бына кеше ниндәйҙер әйбер етештергән саҡта күпкә артығыраҡ һыу сарыф итә. Миҫалға ҡатын-ҡыҙҙар яратып кейгән колготкаҙы ғына алайыҡ. Уның ауырлығы 20-25 грамм, уны эшләр өсөн яҡынса 250 литр һыу кәрәк. Ә 1 тонна ҡорос иретер өсөн 1600 тонна һыу сарыф ителә. Беҙ һыуҙы һаҡһыҙ, тәбиғәткә ҡарағанда дүрт тапҡырға артыҡ ҡулланабыҙ. Әгәр ҙә беҙ халыҡты яҡшы йәшәтер өсөн уға кәрәк булғандың барыһын да ошондай юл менән эшләй башлаһаҡ, эсәр һыуға мохтажлыҡ йылдан-йыл арта ғына барасаҡ.

Ә. ҒӘББӘСОВ: Беҙ үҙебеҙ 78 процент һыуҙан торабыҙ һәм һыуҙың сифаты ни тиклем яҡшы булһа, үҙебеҙ ҙә шул һыу кеүек буласаҡбыҙ. Тимәк, һыу беҙҙең сағылышыбыҙ, һыуыбыҙ ниндәй, үҙебеҙ ҙә шундай. Мин һыуға ҡарата мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртеү маҡсатында баш ҡалабыҙ Өфөлә һәм башҡа ҡалаларҙа "Өсөнсө кран" проектын тәҡдим итәм. Беҙгә әле кран буйынса ике төрлө - эҫе һәм һыуыҡ һыу килә, ә өсөнсө крандан бөтә параметрҙары буйынса ла тик эсер өсөн тәғәйенләнгән һыу килә башлаһа, кешенең һыуға мөнәсәбәте лә үҙгәрер ине, тием. Европа илдәрендә ундай кран бар. Өсөнсө кранға айырым иҫәпләү приборы ҡуйырға, хаҡын да юғарыраҡ күтәрергә була. Нимә генә тимәйек, крандан килгән һалҡын һыуҙы кеше эсә лә, башҡа маҡсатта тотона икән, ул барыбер эсәр һыу кеүек ҡәҙерле түгел. Өсөнсө кранды барлыҡҡа килтереү, шулай итеп, кешене һыу ҡулланыу мәҙәниәтенә өйрәтер ине.

И. ЯППАРОВ: Ысынлап та, хатта ул башҡа һыуға ҡарағанда өс тапҡырға ҡиммәтерәк булған хәлдә лә, кеше ул крандан тик эсер өсөн генә һыу алып, уны ҡәҙерләй башлар ине. Минеңсә, беҙҙең крандар, ғөмүмән, һаҡсыллыҡ талаптарына яуап бирмәй. Әйтәйек, беҙ теш таҙартҡанда йә ҡулды һабынлап йыуғанда крандан һыу ағып тора. Әгәр ҙә крандарҙы ауылдарҙағы йә поезд вагондарындағы ҡулйыуғыс һымаҡ үҙгәртеп эшләһәк, һыуҙы экономиялай алыр инек. Беҙ ер аҫты һыуҙары кимәле төшөүен туҡтата йә уны күтәрә алмайбыҙ, ә һыуҙы һаҡсыл ҡулланып, эсәр һыуҙы экономиялай алабыҙ. Беҙҙең хәҙерге иҡтисад, асылда, ер аҫтынан нефтте һәм газды һурыуға ҡоролған һәм 1 тонна нефть сығарыу өсөн 10 тонна самаһы һыуҙы ер аҫтына ҡыуырға кәрәк. Хәҙер Башҡортостан йылына 500 миллион тонна нефть таба икән, быныҡ өсөн 5 миллиард тонна һыу ер аҫтына ҡыуыла, тигән һүҙ. Әлбиттә, был һыу ер өҫтөнә ныҡ бысранып сыға. Шуға күрә республикабыҙҙың ҡайһы бер райондарында шишмәләр ныҡ бысранған.

Ололар әйтеүе буйынса, еүеш ҡом менән тәһәрәтләнеү ғәҙәте һыуҙы исрафламауға ла бәйле икән. Ғөмүмән, элек һыуға ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт беҙҙең халыҡта әҙәп, әхлаҡ, иман ҡағиҙәләре нигеҙендә нығынған булған. Был мөнәсәбәт хаҡында һеҙ ни әйтһегеҙ?

И. ЯППАРОВ: "Эскән һыуыңа төкөрмә, йөҙөңә ҡутыр сығыр!" тип әйтә торғайны беҙгә өлкәндәр. Минең тыуған Дыуан районының Ҡәҙер ауылында Тоҡорғайын тигән шишмә була торғайны. Ауылыбыҙ ҡарттары ул шишмәне күҙ ҡараһылай һаҡланы, һәр саҡ таҙартып торҙо. Һыу алырға килһәң: "Күнәктәреңде тултырмай ал, ҡайтып еткәнсе һыуың сайпылып түгелеп, әрәмгә китмәһен", - тип беҙҙе киҫәтерҙәр ине. Тағы ла беҙҙең ауыл кешеләре кисен йәшелсә түтәлдәренә һыу һипкәс, өҫтәрен ябып ҡуя инеләр. Һыу быуға әйләнмәһен, ергә һеңһен өсөн шулай итә инеләр. Һыуҙың ҡатыһы, йомшағы була. Әгәр ҙә һыу йомшаҡ булһа, өлкәндәр ул һыуға айырыуса мөнәсәбәттә инеләр, уны һаҡлай торғайнылар.

Ә һеҙ бына тереһыу йәки үлеһыу тигән һыуҙарҙың барлығына ышанаһығыҙмы? Әгәр ҙә ышанһағыҙ, уларға фәнни яҡтан ниндәй аңлатма бирәһегеҙ?

И. ЯППАРОВ: Тереһыу, үлеһыу төшөнсәләре буштан ғына барлыҡҡа килмәгән ул. Беҙ һыуҙы эсер өсөн генә файҙаланмайбыҙ, һыу бик ҙур энергия сығанағы ла булып тора. Һәр бер литр һыуҙа 11 грамм ауыр һыу бар. Бөгөнгө технология ярҙамында шул ауыр һыуҙы айырып алып була. 11 грамм ауыр һыу 2 мең литр бензин биргән миҡдарҙа энергия бирә. Тимәк, беҙ белгән һыуҙа бөтмәҫ-төкәнмәҫ энергия запасы бар. Был ауыр һыу ядро энергияһын алыу өсөн нигеҙ булып тора. Уны эсергә ярамай, шуға күрә лә ул үлеһыу тип атала. Ауыр һыуы айырылып алынғандан ҡалған һыу еңел һыу тип атала. Уныһы инде эсергә яраҡлы тереһыуҙы тәшкил итә. Шуға ҡарамаҫтан, ҡайһы бер ауырыуҙарҙы дауалағанда үлеһыуҙы ла ҡулланып була. Әйтәйек, үлеһыу ҡайһы бер микробтарҙы үлтерә. Шишмә һыуында ауыр һыуҙың миҡдары күпкә аҙ.

Ә. ҒӘББӘСОВ: Һыу күп булғас, беҙҙә уға ҡарата һаҡсыл мөнәсәбәт булманы. Әммә һуңғы ваҡытта кеше һыуҙы һатып ала башлағас, яйлап булһа ла был мәсьәләгә мөнәсәбәт тә үҙгәрә төштө. Минеңсә, һыуҙы ҡулланыу мәҙәниәтенә кешене бәләкәй сағынан башлап өйрәтергә кәрәктер.

Ике һыуытҡысҡа бер үк ваҡытта бер үк температуралағы ике стакан һыуҙы ултыртып туңдырғандар. Бер үк ваҡытта бер стакан янына ғәрәпсә доға яҙғыраған яҙманы ҡуйғандар. Һуңынан ҡараһалар, янында доға яҙғыраған стакандағы һыуҙың өҫтө юлаҡ-юлаҡ биҙәкле булып туңған. Быны нисек аңлатырға була?

Ә. ҒӘББӘСОВ: Аллаһы Тәғәләнең барлығына ышанам, әммә һыуҙарҙың доға ярҙамында шул рәүешле туңыуына ышанып етмәйем. Быныҡ өсөн минең үҙемә был тәжрибәне эшләп ҡарарға кәрәктер.

И. ЯППАРОВ: Һыуға арналған телетапшырыуҙа ҡатнашыусы бер белгес хаҡдан алып ҡайтҡан зәмзәм һыуында зарарлы матдәләр беҙҙәге һыуҙарға ҡарағанда күберәк тип әйткәйне. Минеңсә, һәр һыуҙың үҙенсәлеге башҡаларынан ниндәйҙер элементтың башҡаларына ҡарағанда артығыраҡ йә кәмерәк булыуы менән билдәләнәлер. Мәҫәлән, составында көмөш иондары күберәк булған һыу боҙолмай. Кем белә, бәлки, зәмзәм һыуында көмөш күберәктер. Ә инде доға уҡып һыу туңдырыуға килгәндә, уны үҙем күрмәгәс, нимәлер әйтә алмайым. Әммә мин бында иң беренсе шундай һорау бирер инем: ә ниндәй һыуытҡыста үткәрелгән был тәжрибә? Һыуытҡыстар ваҡыт-ваҡыты менән эшләп ала ла, туҡтап ала. Әгәр ҙә һыу ул туҡтаған арала туңа башлаһа, етмәһә, һыуытҡыс эшләгән саҡта һелкенеп ултырһа, икенсе-һендәге һыуға ҡарағанда икенсерәк семәр барлыҡҡа килер ине. Мин дә Әхтәм Рауил улы кеүек был тәжрибәне үҙем үткәреп ҡараһам, ниҙер әйтер инем.

Һуңғы ваҡытта бер парадоксаль күренеш күҙәтелә: климат йылына, боҙлоҡтар ирей, океан-диңгеҙ һыуҙары арта, ә йылғалар, киреһенсә, һайыға, эсәр сөсө һыу кәмей бара. Был күренештең сәбәбе нимәлә тип уйлайһығыҙ?

Бигерәк тә 2010 йылда Башҡортостан был ҡытлыҡты нығыраҡ кисерҙе. Гидрогеологтарҙың әйтеүе буйынса, Башҡортостанда ер аҫты һыуҙары 2-4 метрға түбәнгә төштө. Былтыр, мәҫәлән, был кимәл күтәрелде, уртаса алғанда күтәрелеш 30 сантиметрға тиң булды. Ғалимдар һыу кимәле түбәнәйеүенең биш йылға һуҙылырын күҙаллай. Быйыл, бер ҡасан да булмағанса, апрелдә үк ҡояш ҡыҙҙыра башланы, тимәк, был һыу кимәленең тағы ла түбәнәйеүенә килтерәсәк. Быға тиклем беҙ, бигерәк тә ауыл ерендә йәшәүселәр, һыуҙы ҡоҙоҡтарҙан ала инек. Йылдан-йыл ҡоҙоҡтарҙа ла һыу ҡалмай башланы. Мин үҙем, мәҫәлән, баҡсамда 7 метрҙан һыу ала инем, хәҙер ҡоҙоғомдоң тәрәнлеге 11 метр.

И. ЯППАРОВ: Климат йылына тигән фаразды мин дөрөҫлөккә тап киләлер тип уйламайым. Сөнки барлыҡ үҙгәрештәр технологияға бәйләнгән. Һәр бер предприятие булһынмы, шәхси кеше булһынмы, барыһы ла күберәк табыш алырға тырыша. Яңы технологияларҙы уйлап сығарыусылар үҙҙәренең идеяһы үтһен һәм табыш килтерһен өсөн етештереүсе предприятиеларға уларҙы төрлө юлдар менән тағырға тырыша. Бер мәл озон тишектәре фреондан, тип табылып, барлыҡ һыуытҡыс ҡоролмаларынан фреондарҙы алып бөттөләр, тик бының менән озон тишектәре ямалманы. Әгәр ҙә климат ысынлап та йылынған булһа, күптәнән донъя океаны кимәле күпмелер миллиметрға күтәрелде, тип әйтерҙәр ине. Ундай мәғлүмәт юҡ. Ни өсөн тигәндә, әгәр ҙә совет осоронан алып барлыҡ боҙҙарҙы иретһәк, донъя океаны 54 метрға күтәрелә, тип әйтеп киләләр. Боҙлоҡтар ирегәс, ҡайҙа ул һыу, ниңә ул климат циклы буйынса күсеп, беҙҙең йылға-күлдәрҙең кимәлен күтәрмәй? Һуңғы 10-15 йыл эсендә көнгырҙар килеп етә алмай. Йылылыҡтың күпмелер өлөшө һыуҙы буыға әйләндерер өсөн китергә тейеш. Йылылыҡ һыуҙы буыға әйләндереү өсөн сарыф ителмәгәнгә күрә лә беҙҙә эҫе. Ул ваҡытта ҡышҡы һыуыҡтарҙы ҡайҙа ҡуябыҙ һуң? Һуңғы ваҡытта температураның 30 градусҡа түбән төшөүе беҙҙең өсөн ғәҙәти хәлгә әүерелде.

▸ Беҙҙең республиканың ҙур өлөшө урман менән ҡапланған. Был осраҡта уларҙың ролен ҡайҙа ҡуябыҙ һуң?

И. ЯППАРОВ: Иң тәүҙә шундай һорауға яуап эҙләйек: Рәсәйҙә ысын урман бармы һуң? Юҡ ул урман беҙҙә, ысын урман ҡырҡылған, юҡ ителгән. Ысын урманға килгәндә, унда уҫаҡ - 40-50, ылыҫлы ағас - 60-тан күберәк йәшлек булырға тейеш. Быларҙан тыш, ысын урманда өлгөргән ағастарҙан тыш, икенсе быуын, өсөнсө быуын ағастар, шунан һуң ҡыуаҡтар һәм үләндәр булырға тейеш. Әгәр ҙә ошоларҙың береһе булмаһа, бындай урман тулы ҡиммәтле урман була алмай. Етмәһә, урман араһына көтөү индерелһә, малдар үләндәр менән бер рәттән йәш үҫентеләрҙе ашап бөтөрһә, бындай урмандың да киләсәге булмай, ул паркҡа әүерелә. Европала һәм Америкала урманға һаҡсыл ҡарайҙар. Улар бер ағасты ҡырҡыр булһа, тәүҙә уны үҫеп ултырған көйө ботайҙар, тәүҙә уның өҫкө өлөшөн киҫеп алалар, иң һуңынан ғына төбөнән ҡырҡалар. Беҙҙә иһә, бер ағасты йыҡҡанда ул ҡолағансы унлаған йәш ағасты, күпме майҙандағы үләнде төләфләйҙәр. Даланы ла үләндәр һаҡлай. Әгәр ҙә ундағы үләндәрҙең һаны 25 төрҙән кәмей башлай икән, таҡыр урындар барлыҡҡа килә. Ҡыҫҡаһы, әгәр ҙә һыуға мөнәсәбәтебеҙҙе үҙгәртергә теләйбеҙ икән, беҙ бында һыуҙы ғына күҙ уңында тоторға тейеш түгелбеҙ. Бармаҡтарҙың ҡайһының тешләһәң дә ауырта.

▸ Ә ниңә һуң, улай булғас, асылда, урман-дала зонаһы һаналған Урал аръяғында (ысынында Урал алдында, сөнки ҡояш иң тәүҙә унда ҡалҡа - Ә.Ғ.-Ү.) биш йылдың 2-3 йылы ҡоро килә, быны нисек аңлатырға?

И. ЯППАРОВ: Картаға күҙ һалһаҡ, Башҡортостандың көнсығышы менән көнбайышы арауығында меридиан булып Урал тауҙары ята. Шуға күрә көнбайыштан килгән дымлы һауаны тауҙар янындағы ҡоро һауа "ҡалҡандары" үткәрмәй тора. Сағыштырыу өсөн Ҡырым менән Кавказ тауҙарын алып ҡарайыҡ. Улар икеһе лә диңгеҙ ярында. Кавказда дымдың миҡдары йылына ике мең ярым миллиметрға барып баҫа, ә Ҡырымда 250-300 миллиметр ғына. Сөнки Ҡара диңгеҙ өҫтөндә барлыҡҡа килгән циклондар көнбайыштан көнсығышҡа ағылған дымлы һауа Ҡырымға барып етмәй. Шуға күрә Ҡырымда - ҡоро субтропик, Кавказда дымлы субтропик зона.

Ә. ҒӘББӘСОВ: Урал аръяғында булһынмы, башҡа урында булһынмы, йылдарҙың ҡоро килеүе һуңғы йылдарҙағы ҡояштың әүҙемлек циклына ла бәйле. Бер нисә йылдан был цикл үтеү менән беҙгә ямғырҙар барып төшә. Күпмелер ваҡыттан һуң ул һыу быуға әйләнә һәм көнбайыштан көнсығышҡа табан болот булып хәрәкәт итеп, кире ергә яуа ла, шишмәләр, йылғалар аша эҫәр һыу бассейндарына әйләнеп ҡайта.

И. ЯППАРОВ: Беҙ ҡулланған һыу быуға әйләнеп, көньяҡ-көнсығышҡа табан китә. Ә беҙгә һыу көнбайыштан килә. Беҙҙән киткән һыу Тымыҡ океанда ҙур әйләнеш яһап, Һинд океанына күсә. Унан һыу Атлантик океанға сыға. Атлантик океандан Гольфстримға барып етә. Шунан һуң ғына һыу молекулаһы үҙенең ҡулланылған урынына ҡайтып етеүе ихтимал. Бер журналда уҡығайным, бер һыу молекулаһы 85-90 йылға бер тапҡыр ғына ҡулланылған урынына кире әйләнеп ҡайта икән.

▸ Ә бына һыуҙың тәбиғи юл менән таҙарыныу процесы нисек бара?

И. ЯППАРОВ: Был тәбиғәткә хас күренеш. Әйтәйек, уртаса йылғала көтөү торһа ла, унан ике саҡрым аҫтағы урында һыу эсергә яраҡлыға әүерелә. Йылға шундай һәләткә эйә. Был осраҡта органик матдәләр менән бысраныу хаҡында һүҙ бара. Ә инде сәнәғәт ҡалдыҡтары менән бысраныу - икенсе мәсьәлә. Совет осоронда һыу һаҡлау зоналарында урмандарҙы ҡырҡырға ярамай ине. Ул зоналар 1-се, 2-се, 3-сө санитар зоналар тип аталды. Хәҙер бындай санитар зоналар бөтөнләй юҡ кимәлендә.

▸ Халыҡта "Һыуҙан таҙа булып булмай" тигән әйтем бар. Бынан тыш, белгестәр "Һәр кешенең эсендә үҙенең шишмәһе сылтырап ағырға тейеш", тип тә әйтә. Йәғни кеше организмына бер туҡтауһыҙ һыу килеп, ул күҙәнәктәрҙе туҡландырып, ағзаларҙы йыуып тормаһа, йәғни ундағы һыу ағымы туҡталһа, организм быуылған шишмә кеүек һаҫый, боҙола, кеше ҡартая һәм ауырый башлай. Ә һеҙ һыуҙың кеше организмына йоғонтоһон нисек аңлата аласығыҙ?

Ә. ҒӘББӘСОВ: "Һыуҙан таҙа булып булмай" тигән әйтемдең мәғәнәһен мин шулай аңлайым: һин ниндәй һыу эсәһең, үҙең дә шул һыу кеүек булаһың, һәр хәлдә, эскән һыуыңдан да таҙа була алмайһың. Табиптар һәр кешегә тәүлегенә һәр төрлө шыйыҡлыҡтан тыш ике литр һыу эсергә лә ҡуша. Ошо рәүешле үҙеңдең шишмәңде булдыраһың инде.

И. ЯППАРОВ: Мин йоҡонан торғас та иң тәүҙә бер стакан һыу эсәм. Студенттарыма ла шулай итергә ҡушам. Ни өсөн тигәндә, ашҡаҙан төнө буйы эшләп сыҡҡандан һуң ундағы кислота уны эстән ашай башлап, язва, гастрит ауырыуҙары башланыуы бар. Ә инде таңдан эселгән бер стакан һыу шул кислотаны шыйыҡландырып, ашҡаҙан өсөн зарарһыҙ итә. "Һыуҙан таҙа булып булмай" тигәнде икенсе яҡтан да ҡарарға кәрәк. Кеше үҙ тормошонда бер генә урында йәшәмәй. Хатта бала күрше ауыл мәктәбенә генә уҡырға барһын, шул арала уның организмына ҙур тәьсир яһала. Был тәьсир һыуға бәйле. Быны үҙемдән сығып беләм. Мин үҙебеҙҙең ауылда һигеҙенсене тамамланым да, Мәсәғүт педучилищеһына уҡырға барҙым. Унда дүрт йыл уҡыған осорҙа дүрт тешемде алмаштырырға тура килде. Училищены тамамлағас, Өфөгә килдем, бында минең тешем ауыртманы. Тимәк, беҙҙең ауылдағы һыу менән Өфө һыуы тап килә. Өфөлә университетты тамамлағандан һуң иң тәүҙә Салауат районына, аҙаҡ Мәсәғүткә эшкә ебәрҙеләр. Мәсәғүттә аспирантураға ингәнсе педучилище директоры булып дүрт йыл эшләнем һәм шул арала тағы ла өс тешемде юғалттым. Шулай итеп, мин Мәсәғүттә йәмғеһе ете тешемде ҡалдырҙым. Һәр кеше үҙенең тыуған еренә яраҡлашып тыуа. Әгәр ҙә кеше артабан икенсе урынға күсһә, һыу менән кеше организмына ингән матдәләр балансы боҙола. Мәҫәлән, кемдеңдер бөйөрөндә таш барлыҡҡа килһә, был ташлар ҡайҙан пәйҙә була һуң? Әлбиттә, улар һыу менән инеп, организм тарафынан эшкәртелеп бөтмәгән ҡалдыҡтарҙан хасил була. Ни өсөн бөгөн кавказлылар оҙаҡ йәшәй? Сөнки уларҙың күбеһе тыуғандан алып бер урында йәшәй һәм ғүмере буйына бер үк һыуҙы эсә.

(Дауамы 10-сы биттә).

ҺЫУҘАР БИРЕГЕҘ,

буйҙарында…

Һыуһыҙ бер нәмә лә эшләп булмай. Әгәр ҙә Хоҙай Тәғәлә беҙгә шул һыуҙы биргән икән, беҙ уның ҡәҙерен белергә, һыуға ҡарашыбыҙҙы үҙгәртергә бурыслы. Һыу өс хәлдә була: ҡаты (боҙ), шыйыҡ һәм пар хәлендә. Һыу ошо өс хәлгә күскән ваҡытта йылылыҡ бүлеп сығара һәм таҙара. Беҙ бөгөн һыуҙың ана шул таҙарған өлөшөн һаҡлау мәсьәләһен күҙ уңында тоторға тейешбеҙ. Атмосферала барлыҡ һыуҙың 7 проценты бар икән, тимәк, 14 йыл һайын бер үк һыу атмосфера аша ергә төшә. Әгәр ҙә беҙ ана шул ваҡыт эсендә кешенең һыуға мөнәсәбәтен үҙгәртеп өлгөрһәк, киләсәктә эсәр һыу проблемаһы булмаясаҡ.

байыш Башҡортостанда, ысынлап та, июнь айының температураһы 2 градус самаһына күтәрелде, әммә ул климаттың йылыныуы менән бәйләнмәгән. Евразияла һуңғы миллион йыл эсендә дүрт тапҡыр боҙлоҡтар булған. Был боҙлоҡтарҙың уртаһында әлеге кеүек йылы миҙгелдәр күҙәтелгән. Беҙ әле дүртенсе боҙлоҡтан һуң сираттағы йылы миҙгелдә йәшәйбеҙ. Ғалимдарҙың фаразы буйынса беҙ бөгөн йылы миҙгелдең яҡынса 12 меңенсе йылында йәшәйбеҙ. Бишенсе боҙлоҡҡа тиклем яҡынса тағы ла 12 мең йыл бар. Бер нисә тиҫтә йылдан һуң беҙҙәге климат тағы ла әкренләп һыуына башлаясаҡ, йәғни боҙлоҡ яйлап ҡына киләсәк. Тағы ла 3, 7, 11, 5, 101, 810, 1800 циклдар барлығы билдәле. Быға шулар менән сағыштырған саҡта беҙ бөгөн 50 йыллыҡтың иң йылы өлөшөндә йәшәйбеҙ. Ул 50 йыллыҡ 1965 йылдар тирәһенән башлана. Беҙгә хәҙер яңы климатик белешмә сығарыу зарур, сөнки климат ҙур үҙгәрештәр кисерә. Бында кешенең дә роле бик ҙур. Әгәр ҙә картаға ҡараһаҡ, беҙҙең Башҡортостан көнбайыштан диңгеҙҙәр менән уратып алынған һымаҡ. Кама, Волга йылғалары һыуһаҡлағыстары тап шул диңгеҙҙе тәшкил итә. Быға шул диңгеҙҙең тәьсирен әле бер кем дә өйрәнмәгән. Минеңсә, ошо йылғалар бассейнынан күтәрелгән күҙгә күренмәҫ турбулент көртә океандарҙан килгән дымлы һауаны беҙгә ебәрмәй тота. Шуның һөҙөмтәһендә беҙгә ямдәүере кире ҡайтасаҡ. Белгестәр хатта Арал диңгеҙенең дә кире ҡайтыу ихтималлығын фараз-лай. Волга йылғаһында күп һандағы һыуһаҡлағыстар төҙөү Каспий диңгеҙен һайығыуға алып киләсәк, тигән фараздар ҙа бар ине. Әммә, белеүебеҙсә, 1978 йылдан башлап Каспийҙа, киреһенсә, һыу кимәле күтәрелә башланы.

И. ЯППАРОВ: Ҡыҫҡаһы, 2025-2030 йылдарҙа беҙҙәге һауа шарттары бөтөнләй икенсе төрлө буласаҡ. Иң мөһиме, йылғалар һыу менән тулыланасаҡ.

(Дауамы 10-сы биттә).

✓ Йылғаларыбыҙҙа ҡыҫала ла бөткәйне, хәҙер улар ҙа тулып йөрөй. Ҡыҫала ул таҙа һыу күрһәткесе. Әй йылғаһына йыланбалыҡ әйләнеп ҡайтты. Совет осоронда бысранып өлгөргән һыуҙарыбыҙ таҙара.

(Башы 8-9-сы биттәрҙә).

▸ Һеҙҙең фекерҙәр боронғоларҙың улдарына кәләште бер йылға буйынан алырға тырышыу йолаһын иҫкә төшөрә. Әхтәм Рауил улы әйткәнсә, әгәр ҙә кешенең 78 проценты (ҡайһы бер сығанаҡтарҙа 84 процент) һыуҙан тора икән, тимәк, бер үк йылғаның һыуын эсеп үҫкән кейәү менән кәләштең 78 проценты тап килә тигән һүҙ. Тимәк, был йола ғаиләнең нығлығына килтергән тип тә иҫәпләргә урын бар...

И. ЯППАРОВ: Тап шулай. Ундайҙарҙан тыуған балалар тағы ла сифатлыраҡ булалыр. Сөнки ул баланың формалашыуында ҡапма-ҡаршылыҡ әҙерәк, улар үҙен тыуҙырыусыларға ҡарағанда талантлыраҡ. Минеңсә, бер йылға буйынан килен һайлау ошо маҡсаттан да сығып үтәлгәндер. Һуңғы ваҡытта Себерҙә, Алыҫ Көнсығышта аҡылға зәғиф балаларҙың күберәк тыуа башлауы хаҡында хәүефле мәғлүмәттәр килтерә башланылар. Был хәл элек тә күҙәтелгән, тик мәғлүмәт ябыҡ булыуы арҡаһында беҙ был хаҡта белмәгәнбеҙ. Бында ла йәштәрҙең өйләнешеүендә "бер йылға буйы принцибы" күҙәтелмәүе зәғиф балалар тыуыуында сағылыш табалыр, тип уйларға була. Әйтәйек, Рәсәйҙең Европа һәм Азия өлөшөндә төрлө шарттарҙа, төрлө милли ерлектә тыуып үҫкән ике йәш кеше Себерҙә осрашып өйләнешһә, уларҙың балаһында ике төрлө мөхит, ике төрлө ҡан көрәше башлана. Әгәр ҙә уларҙың береһе еңһә, бала шул яҡҡа ауыша, әгәр ҙә береһе лә еңә алмаһа, был хәл балала сир, зәғифлек булып сағылыш таба. 1978 йыл Өфөлә халыҡ-ара семинар булды. Унда һәр алтынсы баланың аҡыл яғынан зәғиф булып тыуыуы иғлан ителеп, был хәлдең сәбәптәрен асыҡларға тырыштыҡ һәм ҡыҙыҡ ҡына асыш яһалды. Баҡтиһәң, үҙенең тыуған һәм формалашҡан шарттарынан айырылған кеше тыуыр балаһына яҡшы сифаттарын бирә алмай икән, балаға унан тик насар сифаттар ғына күсә. Әгәр ҙә тыуыр баланың атаһы менән әсәһе икеһе лә яңы шарттарҙа баланы яралтһа һәм тыуҙырһа, уларҙың икеһенең дә кире сифаттары балаға күсә һәм бала аҡыл йәһәтенән зәғиф булып ҡала.

▸ Инбер Мөхәмәт улы, һеҙгә географ булараҡ күптән яуабын таба алмаған бер һорауым бар. Өйләнешкәндән һуң ҡатын ирҙең фамилияһын алған кеүек, тәбиғәттә лә шулай: көслө көсһоҙгә буйһона, ҙур бәләкәйҙе йота, көсһоҙ һәм бәләкәй көслөнөң һәм ҙурҙың исеме менән атала башлай. Ә бына ни өсөн Ырымбур ҡалаһы янында Һаҡмар менән Йәйыҡ ҡушылғандан һуң артабан йылға Йәйыҡ исеме менән дауам итә һуң? Ни өсөн Һаҡмар түгел? Нимә генә тимә, хатта ҡушылған урынында ла Һаҡмар Йәйыҡҡа ҡарағанда өс тапҡырға киңерәк. Бында йылғаларҙың оҙонлоғо ғына иҫәпкә алынғанмы, әллә был хәл "Йәйыҡ казактары" төшөнсәһенә бәйлеме?

И. ЯППАРОВ: Был хәл бер Һаҡмар менән Йәйыҡҡа ғына ҡағылмай. Волга йылғаһының иң төп ҡушылдыҡтарының береһе Ока йылғаһы. Ҡушылған урында Оканың һыуы мулыраҡ булһа ла, Валдайҙан алып Каспийға тиклем йылға Волга тип атала. 80-се йылдарҙа географтар был мәсьәләне күтәреп тә сыҡты. Шул уҡ ваҡытта Волганың башын Каманың, Ағиҙелдең, Ҡариҙелдең башынан да һанарға була һәм ул йылғалар Волгаға ҡарағанда күпкә ҡартыраҡ. Волганың йәше 20-25 мең йыл ғына. Волганың боронғо исеме лә бар: Итиль йәки Иҙел. Әгәр ҙә был атаманы башҡорттар биргән икән, тимәк, ошо фактҡа ғына ҡарап, тарихи Башҡорт еренең дә ҡайҙан ҡайҙа һуҙылғанын төҫмөрләп була. Тимәк, ул саҡта Ирәмәл итәгенән баш алған йылға хәҙерге Ағиҙел, Кама, Волга буйлап Каспийға тиклем Иҙел исемен йөрөткән бер йылға булған, тигәнде раҫлай был дәлил. Ҡыҫҡаһы, йылғаның исемен билдәләүҙә тарихи фактор ҙур роль уйнай, йәғни, теге йәки был йылға буйында булған кеше ҡасан рәсми рәүештә йылғаның исемен яҙып теркәһә, йылға шул исемде алып киткән. Һаҡмар менән Яйыҡ йылғаһына килгәндә, ысынлап та, Яйыҡ оҙонораҡ йылға, әммә Ырымбурҙан һуң да йылғаның Яйыҡ тип аталыуында уның оҙонлоғо роль уйнамай. Ғөмүмән, борон берәү ҙә йылғаларҙың оҙонлоғон үлсәп йөрөмәгән. Бәхетенә күрә, Яйыҡ яҙма сығанаҡтарға иртәрәк эләккән, шул сәбәпле ул Камағаса үҙенең исемен һаҡлап аға.

Ә. ҒӘББӘСОВ: Ысынлап та, Һаҡмар йылғаһы урман йылғаһы иҫәпләнә, шуға күрә Яйыҡҡа һыуҙы мул алып килә.

И. ЯППАРОВ: Яйыҡ йылғаһы Пугачев яуынан һуң Екатерина Икенсенең Указы менән Уралға үҙгәртелә. Уның исемен киренән ҡайтарғанда бик яҡшы булыр ине. Һуңғы ваҡытта кем теләй, шул карта төҙөй башланы. Барыһында ла хаталар туп-тулы. Мин карталарға үҙебеҙҙең йылға исемдәренең аталышын кире ҡайтарыу мәсьәләһе менән Мәскәүгә мөрәжәғәт иткәйнем, быныңөсөн 4-5 миллиард һум аҡса талап ителеүе хаҡында әйттеләр. Баҡтиһәң, быныңөсөн бөтөн донъялағы карталарҙы киренән сығарырға кәрәк икән. Ә бына үҙебеҙҙә сыҡҡан карталарға Белая тигәндең эргәһенә йәйә эсенә Ағиҙел, Дема эргәһенә - Дим, Худолаз эргәһенә - Төйәләҫ тип яҙыу рөхсәт ителә. Беҙ ундай карталарҙы төҙөп сығарҙыҡ, улар һатылып бөттө инде, был эште дауам итергә кәрәк.

Ә. ҒӘББӘСОВ: Бик кәрәкле эш. Беҙ бынан 20 йыл элек Банный тип йөрөтөлгән күлдең эргәһенә йәйә эсенә Яҡтыкүл тип яҙып килә торғас, иң төҙҙә уларҙың урындары алмашынды һәм Банный һүҙе төшөп үк ҡалды бит.

▸ Ер шарындағы барлыҡ һыуҙарҙың 1 генә проценты эсергә яраҡлы булһа ла, йылдан-йыл ул кәмегәндән-кәмей бара. Былай барһа, һуңынан диңгеҙҙәге тоҙло һыуға көнөбөҙ ҡалмаҫмы?

Ә. ҒӘББӘСОВ: Күп кенә урындарҙа эсәр һыу ҡытлығы әле үк күҙәтелә. Хәҙерге ваҡытта эсәр һыуҙы айсбергтарҙан иретеп алыу мөмкинлеген дә ҡуллана башлаусылар бар. Тоҙло диңгеҙ һыуҙарын сөсөләндереүсе ҡоролмалар ҙа төҙөү кәрәк буласаҡ киләсәктә. Владивостокта, Каспий диңгеҙендә ундай ҡоролмаларҙы эшләп ҡаранылар. Әгәр ҙә эсәр һыу ошо рәүешле кәмеһә, оҙаҡламай һыу нефть, газ һымаҡ стратегик тауарға әүерелеүе бик мөмкин.

И. ЯППАРОВ: Австралияла эсәр һыу етешмәгәнлектән, Антарктиданан бер айсбергты буксир менән һөйрәтеп алып ҡайтҡандар. Израиль дә эсәр һыуһыҙ интегә. Улар ҙа айсберг һөйрәтеп алып ҡайтырға уйлағайны, башҡа илдәр Урта диңгеҙ аша уларҙың юлын киҫте. Шуға күрә Израиль дәүләте һыуҙы ҡиммәт хаҡҡа күрше дәүләттәрҙән һатып алырға мәжбүр.

Киләсәктә беҙҙең илдең иҡтисадын һыу һатып тулыландырыу ихтыяжы ла тыуасаҡ. Ни өсөн тигәндә, нефть менән газ мәңгелек түгел, эсәр һыуға килгәндә, уның ҙур запасы Рәсәй территорияһында. Эсәр һыуҙың иң ҙур өлөшө Байкал күлендә.

Һыу бысрана, эсәр һыуҙар кәмей, тиһәләр ҙә, мин ул яҡтан оптимисмын. Ни өсөн тигәндә, һуңғы 20 йыл эсендә һыуҙың кәмеүе күҙәтелһә лә, һыуҙың таҙара барыуына инанам. Салауат районының Яхъя ауылы эргәһендә генә Кропачево депоһы бар ине. Депо эшләмәй башлағайны, эргәһендәге йылғала бәрҙе балығы күренә башланы. Йылғаларыбыҙҙа ҡыҫала ла бөткәйне, хәҙер улар ҙа тулып йөрөй. Ҡыҫала ул таҙа һыу күрһәткесе. Әй йылғаһына йыланбалыҡ әйләнеп ҡайтты. Совет осоронда бысранып өлгөргән һыуҙарыбыҙ таҙара, беҙгә уларҙы ҡабат бысратырға ярамай.

Ә. ҒӘББӘСОВ: 90-сы йылдарҙан башлап сәнәғәт предприятиелары күпләп эшләмәй башланы һәм ташландыҡ һыуҙар әҙәйҙе. Шуның һөҙөмтәһендә беҙҙең төп йылғалар 4-се, 5-се класҡа күсте. Был - беренсенән, икенсенән, экологияға иғтибарҙың артыуы һөҙөмтәһендә сәнәғәт предприятиелары ҡалдыҡ һыуҙарын үҙҙәре таҙарта хәҙер. Штраф санкцияларының артыуы ла эҙһеҙ үтмәй.

И. ЯППАРОВ: Иң яҡшы тәбиғи таҙартҡыс - ул һаҙлыҡ. Һаҙлыҡтың әле өйрәнеп бөтөлмәгән таҙартыу үҙенсәлектәре бар, әммә беҙ юл налабыҙ, сәсеү майҙандарын арттырабыҙ, тип һаҙлыҡтарҙы киптерәбеҙ. Бысраҡ һыуҙы һаҙлыҡ аша үткәрһәң, ул 100 проценты менән таҙарып сыға. Бер миҫал. Беҙҙәге экологик һәләкәттәр Америкала үткән быуаттың 30-сы йылдарында уҡ булған. Унда һәр бер предприятиеға үҙенең таҙартыу ҡоролмаларын эшләргә мәжбүр итәләр. Бынан тыш, һәр бер предприятиеның таҙартылған һыуын тикшереп торғандар. Шунда бер бәләкәй генә һөт заводы, ҡалдыҡ һыуҙары составында иң зәһәрле һаналған һөт кислотаһы булыуға ҡарамаҫтан, бөтә күрһәткестәр буйынса ла алға китә, штраф түләмәй. Бер мәл башҡалар был заводтың тәжрибәһен өйрәнергә булған. Ҡараһалар, заводтың бер ниндәй таҙартыу ҡоролмаһы булмай сыға. Баҡтиһәң, заводтың ҡалдыҡ һыуы һаҙлыҡ аша үтә икән. Шуға күрә күп илдәрҙә һаҙлыҡтарҙы һаҡларға тырышалар. Һаҙлыҡтар һәр саҡ йылға буйҙарында урынлаша һәм йылғаның һыуы уның аша үтмәгән хәлдә лә, һаҙлыҡ уның һыуын таҙарта.

▸ Башҡортостанда иң таҙа һыу ҡайҙа, ниндәй йылғала?

И. ЯППАРОВ: Совет осоронда Европалағы иң таҙа һыулы йылғалар булып Инйәр менән Эҫем йылғалары иҫәпләнә ине. Әммә улай булмай сыҡты. Мин, ғөмүмән, бигерәк тә сәнәғәт предприятиелары булған урындарҙа таҙа шишмәләр булыуына шикләнәм.

Ә. ҒӘББӘСОВ: Өфөлә фенол эпопеяһы башланғас, баш ҡалаға һыуҙы Инйәрҙән торба аша алырға уйлағайныҡ. Тикшереп ҡараһаҡ, диоксин Инйәрҙә Өфө янындағы йылғаларға ҡарағанда артығыраҡ булып сыҡты. Баҡтиһәң, Стәрлетамаҡ, Ишембай, Салауат ҡалалары сәнәғәт предприятиеларының ҡалдыҡтары Инйәр буйына болот булып килеп яуа икән.

▸ Һыуҙың ҙур өлөшө ғаләмдә һәм ерҙең үҙәгендә тупланған. Ул һыуҙар ерҙәге һыу әйләнеше системаһы буйынса хәрәкәт итәме?

И. ЯППАРОВ: Ғаләмдәге быу рәүешендә йөрөгән һыу миҡдары әллә ни күп түгел, әммә унда водород һәм кислород рәүешендә айырылып йөрөгән һыу запасы бихисап. Беҙ ул запастан йылына 10 миллион тонна самаһы һыу алабыҙ. Уны икенсе төрлө итеп Ҡояш ямғыры тип тә атайҙар. Шул уҡ ваҡытта шунсама һыу ерҙән озон ярыҡтары аша үтеп, ике өлөшкә бүленеп, беҙҙән китеп тора. Бында һыу алмашыныу процесы ғына бара. Ошо рәүешле ер үҙәгендәге һыуҙың да 7-8 проценты йыл һайын ер өҫтөндәге һыу менән алмашынып тора.

▸ Быйыл ҡыш ҡар әҙерәк яуһа ла, яҙ ташҡын көслө булды. Быны нимә менән аңлатырға була?

И. ЯППАРОВ: Сөнки ҡыш ҡар аҙ булғанлыҡтан, ер бик тәрәнгә төшөп туңды һәм ҡапыл ирегән яҙғы һыу туң ергә һеңмәйенсә, өҫтән ағып китеп, күп урындарҙа ташҡын барлыҡҡа килтерҙе.

Ә. ҒӘББӘСОВ: Быйылғы ташҡынға шулай уҡ яҙғы ҡарҙың һәм ямғырҙың самаһыҙ күп яуыуы ла булышлыҡ итте. Бигерәк тә бәләкәй йылғаларҙа ҡапыл күтәрелгән һыу сүп-сарҙы ағыҙып алып китеп, төҙҙә тығындар барлыҡҡа килтерҙе, ямғырҙар иһә был тығындарҙы йырҙы һәм һыу ташыуы күҙәтелде. Краснокама районында, мәҫәлән, һыуҙың дүрт метрға тиклем күтәрелгән урындары ла булды. Таналыҡ йылғаһы ташып, Хәйбулла районының Бығаулыҡ ауылын һыу баҫты. 2007 йылда Ағиҙел йылғаһы 8 метрға, былтырғы яҙҙа 417 сантиметрға күтәрелгәйне, быйыл 500 сантиметрға тиклем барып етте. Ошоларҙан сығып ҡына Ағиҙелдә һыуҙың ни тиклем кәмеүен төҫмөрләп була. Яҙ һыуһаҡлағыстарҙы һәм быуаларҙы тулыландырыу мизгеле лә. 2010 йылда беҙ барлыҡ һыуһаҡлағыстарҙы һыу менән тултырып, Нөгөш һыуһаҡлағысын ғына һыу менән тәьмин итә алмаһаҡ, быйыл, Аллаға шөкөр, уныһын да тултырҙыҡ. Йомағужа һыуһаҡлағысында ла һыу етерлек булды хәҙер. Павловка һыуһаҡлағысында 1 миллиард 400 миллион тонна һыу запасы һаҡлана.

▸ Быйыл йәй ямғыр яуырмы икән, һеҙҙең прогноздарығыҙ нисек?

И. ЯППАРОВ: Минең күҙәтеүҙәрем буйынса, быйыл майҙа ямғыр күпләп яуыр, ә июнь һәм июль айҙарында әҙерәк яуыр ҙа көҙ тағы ла күбәйер тип уйлайым. Тағы ла яҙ иртә килһә, йәй башында ҡар яуыу ҡурҡынысы ла бар.

Ә. ҒӘББӘСОВ: Бынан бер нисә йыл элек август айында ҡар яуғанын иҫләйем.

И. ЯППАРОВ: Мин дә иҫләйем, 1977 йылдың августында ҡар яуҙы. Тағы ла 1990 йылдың 3 июлендә ҡар яуҙы. Ул саҡта беҙ студенттар менән Ирәмәл тауына менгәйнек, иртәнсәк палаткаларыбыҙҙа өшөп уянып тышҡа сыҡһаҡ, йәй уртаһында ҡыш килгәйне, науыттарыбыҙҙағы һыуҙар туңғайны. Тәбиғәттә йәй уртаһындағы көтөлмәгән ҡыштар, ҡыш уртаһындағы йәйҙәр булып тора.

ШУЛАЙ ИТЕП...

"Көн яманы китеп барыр, китмәҫ әҙәм яманы", тиҙәр. Шул уҡ ваҡытта күберәк осраҡта көндө ниңәлер туҡтауһыҙ ямғыр, ҡар яуғанда, дауыл ҡупҡанда яманлайҙар. Ә инде оҙаҡ ваҡыт ҡояшлы булып, ямғыр яумайынса һауа шаңғырҙап кибеп китһә, әҙәм балаһы тағы ла яманлаған ҡарлы-ямғырлы-дауыллы көндө юҡһына башлай. Шуға күрә беҙ был мәсьәләлә алтын урталыҡты һайлайыҡ та, "тәбиғәттә насар һауа торошо булмай" тигән әйтемдә туҡталайыҡ. Ана бит, Инбер Мөхәмәт улы менән Әхтәм Рауил улы тәбиғәттә күҙәтелгән барлыҡ киҫкен күренештәрҙең ваҡытлыса ғына булыуы хаҡында әйтә. Әммә нисек кенә булмаһын, барыбер ҙә беҙгә һыу буйҙарында һыуға сарсарға ғына яҙмаһын.

Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ әңгәмә ҡорҙо.

Волганың боронғо исеме лә бар: Итиль йәки Иҙел. Әгәр ҙә был атаманы башҡорттар биргән икән, тимәк, ошо фактҡа ғына ҡарап, тарихи Башҡорт еренең дә ҡайҙан ҡайҙа һуҙылғанын төҫмөрләп була. Тимәк, ул саҡта Ирәмәл итәгенән баш алған йылға хәҙерге Ағиҙел, Кама, Волга буйлап Каспийға тиклем Иҙел исемен йөрөткән бер йылға булған, тигәнде раҫлай был дәлил. Ҡыҫҡаһы, йылғаның исемен билдәләүҙә тарихи фактор ҙур роль уйнай, йәғни, теге йәки был йылға буйында булған кеше ҡасан рәсми рәүештә йылғаның исемен яҙып теркәһә, йылға шул исемде алып киткән.

✓ *Кинофильм беҙҙең Ишембай районында (ул саҡта район исемен йөрөткән Маҡар яҡтарында) төшөрөлгән, ауылыбыҙ Кинйәбулаттан да, үҙ аттары менән барып, массовкала - "Салауат һуғышында ҡатнашҡан" кешеләр байтаҡ булған.*

ХӘТЕР ЯҢЫРТЫП…

САЛАУАТ ТУРАҺЫНДАҒЫ ТӘҮГЕ ФИЛЬМ…

донъя күрмәгән икән

Ҡарамайбыҙ бер нәмәгә,
Хатта буран, дауылға.
Сөнки оло байрам була,
Кино килһә ауылға.
Мәктәп уҡыусыһы булған йылдарҙа ижад ителгән хәйләһеҙ, бер ҡатлыраҡ күренгән был шиғыр минең өсөн ҡәҙерле. Ысынлап та, һуғыштан һуңғы йылдарҙа клубта кино ҡарау ауыл халҡы өсөн ҙур ваҡиғаға әүерелә торғайны. Бигерәк тә балаларға һәр көн көтөп йөрөгән, онотолмаҫ байрам ине.

Бына бер көндө ауылыбыҙға "Салауат Юлаев" тигән нәфис фильм алып килделәр. Ул көндө йортонда берәү ҙә ҡалмағандыр - клубта баҫып торор урын юҡ ине. Инә алмағандар, күҙ ҡырыйы менән генә булһа ла, тәҙрә аша ҡарап торҙолар. Миңә лә бары шул бәхет эләкте. Бәхеткә, "Салауат Юлаев"ты икенсе көндө лә күрһәттеләр. Һәр өйҙә, бөтә урында һүҙ бары фильм хаҡында ғына булды. Беҙ, бала-сағалар, Салауат батырлығына таң ҡалһаҡ, ололарҙы тетрәндергән тағы ла бер ваҡиға бар ине: кинофильм беҙҙең Ишембай районында (ул саҡта район исемен йөрөткән Маҡар яҡтарында) төшөрөлгән, ауылыбыҙ Кинйәбулаттан да, үҙ аттары менән барып, массовкала - "Салауат һуғышында ҡатнашҡан" кешеләр байтаҡ булған. Бер нисәүһенең "үҙемде" йәки "атымды танып ҡалдым", тип һөйләгәндәре һаман хәтерҙә. Сабый сағыбыҙҙан йөрәк түребеҙҙәге Салауат образы, уның хаҡында һуғышҡа тиклем үк төшөрөлгән, шул замандың оло ваҡиғаһы булған фильмды ҡарағандан һуң, туған ереңде, илеңде, халҡыңды яратыу өлгөһөнә - идеалға әүерелде. Ниңә ундай киноны элегерәк, беҙҙең атай-бабайҙар иҫән саҡта уҡ, төшөрмәнеләр икән, тип тә уйлана торғайныҡ. Ә бит ундай теләкынтылыштар, башланғыстар булған. Быныҡ өсөн әҙ генә революциянан һуңғы осорҙарға ҡайтайыҡ, архив материалдарына күҙ һалайыҡ.

Үтеп киткән быуаттың 20-се йылдар аҙағында Кавказ, Кавказ аръяғы, Волга буйы һәм Себер төбәктәрендә йәшәүсе халыҡтың революциянан һуңғы ихтыяжын ҡәнәғәтләндереү маҡсатында "Востоккино" тигән кинотрест төҙөлә. Бына ошо ойошмала 1928 йылда Салауат Юлаев хаҡында тауышһыҙ фильм төшөрөү тураһында идея тыуа. Башҡорт батырына һәм шағирына арналған сценарий яҙыу өсөн кинотрест етәкселәре Башҡортостандың билдәле әҙәбиәт һәм сәнғәт эшмәкәрҙәренә мөрәжәғәт итергә булалар. Ошо осорҙа күренекле режиссер Вәли Мортазин етәкселек иткән Башҡорт драма театрында "Ҡарағол" исемле тарихи драмаһы һәм башҡа әҫәрҙәре менән танылып өлгөргән ҙур йәмәғәт эшмәкәре, атаҡлы яҙыусы Дауыт Юлтыйҙың "Салауат" исемле драмаһы ҙур уңыш менән бара. Уға мөрәжәғәт итәләр. Әммә "Востоккино" ойошмаһы һорауы буйынса әҫәрҙең кинематографик сценарийы яҙылып тапшырылһа ла, ни өсөндөр, билдәле башҡорт яҙыусыһының хеҙмәте тормошҡа атҡарылмай ҡала. Кинотрест етәкселәре башҡорт халҡының батыры һәм шағиры тураһында сценарий яҙыуҙы йәш драматург Георий Эдуардович Гребнер тигән кешегә тапшыралар. Кинодраматургияла был уның тәүге эше була. Артабан ул "Суворов", "Иван Иванович менән Иван Никифорович нисек ыҙғыштылар", "Ун биш йәшлек капитан" һәм башҡа фильмдарға сценарий яҙып, совет кино сәнғәтенең билдәле эшмәкәре булып китә. 1947 йылда уға "Крейсер "Варяг" кинофильмы өсөн СССР Дәүләт премияһы ла бирелә.

Йәш автор яңы тема өҫтөндә ҙур дәрт, илһам һәм мауығыу менән эшләй. Шул уҡ ваҡытта йәш драматург ижади эҙләнеүҙәрендә ҙур ҡыйынлыҡтарға ла осрай. Салауат Юлаев тураһында материалдарҙың аҙ, тарихи дөрөҫлөк йәһәтенән ҡайһы берҙәренең шикле булыуы, 1773-1774 йылдарҙағы Крәҫтиән һуғышы хаҡындағы тарихи сығанаҡтарҙың буржуаз күҙлектән бер яҡлы яҡтыртылыуы, ул осорҙа архивтарҙан хәҙерге көндә киң билдәле булған яҙмаларҙы алыу тыйылған - былар бөтәһе лә ауырлыҡ өҫтөнә ауырлыҡ өҫтәй. Шуға ла Г. Э. Гребнер Башҡортостан тарихсылары, әҙәбиәт, сәнғәт һәм партия эшмәкәрҙәре менән осраша, уларҙан консультациялар ала, ҡабат-ҡабат архив материалдарында эҙләнә. Был тикшеренеүҙәр, әлбиттә, эҙһеҙ юғалмай. Драматургтың ныҡышмалығы теманы тағы ла тәрәнерәк аңларға, яңы сценарий яҙырға мөмкинлек тыуҙыра.

1929 йылдың октябрь айында ВКП(б)-ның Башҡортостан Өлкә Комитетында, партия һәм совет ойошмалары вәкилдәре, фәнни учреждение, мәҙәниәт эшмәкәрҙәре ҡатнашлығында кәңәшмә ойошторола. Унда ҡатнашыусылар Г. Гребнерҙың Салауат Юлаев тураһында яҙған сценарийын тикшереп, ҡайһы бер етешһеҙлектәренә күрһәтеп, асылда, хупларға тигән ҡарар ҡабул итәләр.

1930 йылдың яҙында "Салауат" автор тарафынан киностудияға тапшырыла һәм ул ошо уҡ йылдың планына индерелә. Төшөрөүҙе "Востоккино"ның Ялта кинофабрикаһынан режиссер А. Без-Назаров башларға тейеш була. Киноны төшөрөү осорондағы сығымдарға смета ла төҙөлә. Үкенескә ҡаршы, эш ошоларҙан ары уҙмай. Артистар коллективы ла йыйылмай ҡала. Фильмды төшөрөү эштәре икенсе йылға, тора-бара фильм киностудияһының резерв фондына ҡалдырыла. Бына шулай "Салауат" йылдан йылға күсерелә торғас, 1935 йылдың август айында "Востоккино" тресы ябыла. Уның менән бергә батырыбыҙ һәм шағирыбыҙ тураһындағы тәүге киноэкран әҫәре лә юғала. Билдәле кинорежиссер Ю. Желябужский, киностудия ябылырға тик бер ай элек кенә "Востоккино" етәкселәренә ебәргән хатында, һәйбәт сценарийҙарҙың булмауы хаҡында яҙып, шундай үтенесен дә белгертә: "Байтаҡ йылдар инде треста Г. Гребнерҙың "Салауат Юлаев" тигән сценарийы ята, - тип яҙа ул. - Сценарий бик ҡыҙыҡлы һәм уңышлы яҙылған. Уны эҙләп табып булмаҫмы икән?.." Ләкин хат яуапһыҙ ҡалған, күрәһең.

Шулай итеп, Салауат хаҡындағы тәүге киноповесть уңышһыҙлыҡҡа юлыға. Тамашасы уны күрә алмай, хатта күптәре был хаҡта белеп тә бөтмәй. Ниндәй сәбәптән шулай килеп сыҡҡан һуң? Беренсенән, "Востоккино"ның ул саҡтарҙа финанс һәм техник базаһы бик насар хәлдә була, шуға ла кинотрест етәкселәре кинофильмдар эшләп сығарыу планын ҡыҫҡартырға, йә булмаһа алдағы йылдарға күсерергә, ҡайһы бер осраҡтарҙа, сығымдарға аҡса бөтөнләй бүленмәү сәбәпле, планлаштырғандарынан да баш тартырға мәжбүр булалар. Тағы ла бер мөһим сәбәп тә булған, әлбиттә. "Востоккино" башҡа киностудияларҙа фильмдар төшөрөргә ҡырҡа ҡаршы була. Икенсенән, тәүге "Салауат" сценарийы яҙылған дәүер илдә тауышлы киноларҙың тыуа башлаған ваҡытына тура килә. Улар, әлбиттә, тауышһыҙ фильмдарҙан ныҡ айырылып тора. Ваҡыт үткән һайын, кино сәнғәтенә, техникаһына талаптар ҙа арта бара, бигерәк тә нәфис кинофильмдарға. Бына был инде Салауат Юлаев тураһында тауышһыҙ тәүге кинофильм сыҡмауға, бәлки, төп сәбәп тә булғандыр.

Әммә батырыбыҙ һәм шағирыбыҙ хаҡында кинодраматургияла тәүге һүҙ - ғәмәлдә уңышлы тип табылған, шишмә башы булған киносценарийҙы эҙләп тапҡанда, уҡыусыларға еткергәндә, Салауатыбыҙ образын тулыландырыу өлкәһендә ҙур һәм изге эш булыр ине.

Һүҙ башында һуғыштан һуңғы йылдарҙа "Салауат Юлаев" фильмын ҡарау тетрәткес ваҡиғаға әүерелеүен әйткәйнем. Ошо хис-тойғо күптәребеҙҙә ғүмерлеккә ҡалды. Йылдар үтә торҙо. Тормошомдоң бер осоронда урыҫ теленән байтаҡ ҡына нәфис, мультфильмдарҙың һүҙҙәрен (текстарын) башҡортсаға ауҙарырға тура килде. Баҡһаң, тәржемә-дубляж эше 1946 йылда уҡ башланған, илебеҙҙә һәм сит илдәрҙә сыҡҡан 500-ҙән ашыуыраҡ кинофильмдар артистарыбыҙ теле менән "башҡортса" һөйләшкән. Ә бына батырыбыҙ образын һоҡланғыс итеп донъяға тыуҙырған Арыҫлан Мөбәрәков һәм башҡа шул фильмда ҡатнашҡан мәшһүр артистарыбыҙға, һуғыштан һуң оҙаҡ ҡына ғүмер ижад осоро бирелһә лә, "Салауат"ты башҡортса һөйләштерә алыу бәхете теймәгән. Сөнки юғарынан рөхсәт - күрһәтмә булмаған. Быныһы инде, тәүге тауышһыҙ фильм сыға алмаған кеүек, ғорурлығыбыҙға әүерелгән тарихи шәхсебеҙ өсөн икенсе үкенес...

Хәйер, былар артта ҡалған тарих. Бөгөнгөһө - 20-се быуаттың һоҡланғыс тарихы - Салауатыбыҙҙың иҫ киткес бейеклеккә күтәрелеүе. Спортты, атап әйткәндә, хоккейҙы ғына алайыҡ. Бөтә донъя кешеләрен, бигерәк тә йәштәрҙе үҙен мөкиббән иткән бөтә булмышыңды яулаған уйын ғынамы һуң! Спорт көрәше, яуы ул! Күпме командалар көрәшә! Ә бит бер юлы батыр ҙа, шағир ҙа булған исемде йөрөткән донъя йөҙөндә башҡа бер генә команда ла юҡ! Ул бары Башҡортостанда ғына!

Был команда һуңғы йылдарҙа ике тапҡыр ил еңеүсеһе булып бөтә илдәрҙә танылды. 2011 йылдың 16 апрелендә Өфөлә Гагарин исемен йөрөткән кубокты яуланы. Шул кистә үк "Исем-даның йылдан күсә" тигән шиғырымды яҙҙым. Гәзит уҡыусыларға ла һүҙ аҙағым ошо ғорурланыу булһын:

Иҫ китерлек эштәр эшләнек беҙ,
Салауат тигән иргә таянып.
(Башҡорт халыҡ йырынан).

Элек ҡылыс, хәҙер сәкән һелтәп
Боҙ өҫтөндә ялҡын уйнатып.
Исемеңде аҡлап ҡыйыу ир-ат,
Сәм, ғорурлыҡ һәм дәрт уятып.

Балтик буйҙарында тоҙ яланына
Азат тормош өсөн юл ярып.
Иҫ китерлек бейек күтәрелдек,
Боҙға түгел, һиңә таянып!

Исем-даның телдән-телгә күсә,
Ул - мәңгелек, ҡалмаҫ юғалып.
Шағирыбыҙ, бөйөк батырыбыҙ,
Донъя баға һиңә таң ҡалып!

Риф МИФТАХОВ.

БЕЛМӘҺӘҢ - БЕЛ

ТӘҮГЕ "ӘЛИФБА" АВТОРЫ

Катанов Николай Федорович 1862 йылдың 6 (18) майында хәҙерге Хакас Республикаһының Аскиз районында донъяға килә. Милләте буйынса хакас. Аскиз училищеһын тамамлағандан һуң Красноярскиҙағы гимназияға уҡырға инә һәм уны алтын миҙалға тамамлай. Белем алыуын Санкт-Петербург университетының көнсығыш телдәр факультетында дауам итә.

1888 йылдан 1892 йылғаса Фәндәр академияһы ойоштороған ғилми экспедиция составында Себерҙә, Монголияла, Ҡытай Төркөстанында була. Шул ваҡытта урындағы төрки халыҡтарының ғөрөф-ғәҙәттәрен, көнкүрешен, телен, фольклорын өйрәнә. 1893 йыл һуңында төрки-татар теле буйынса магистр дәрәжәһендә Ҡазан университетына төрки-татар һөйләштәре кафедраһына экстраординар профессор итеп тәғәйенләнә. **XIX быуат һуңында - XX быуат башында Н. Катанов рус графикаһы нигеҙендә "Башҡорт теле өсөн әлифба" китабын төҙөй.**

Ғилми эшмәкәрлегенән тыш, Николай Федорович йәмәғәт эштәрендә лә әүҙем ҡатнаша. Уның Ҡазандың айыҡлыҡ хәрәкәтендә ҡатнашыуы ҙур әһәмиәткә эйә була һәм ул ғүмеренең һуңғы көндәренәсә айыҡ тормошҡа тоғро булып ҡала.

1917 йылда Н. Катановҡа яңы властың эҙәрлекләүҙәрен урап үтергә насип була. Ул һаман да Ҡазанда йәшәүен һәм эшләүен дауам итә. Шунда уҡ вафат була. 1994 йылда Хакас дәүләт университеты асылғас, белем усағына Н. Ф. Катанов исеме бирелә.

✓ *Миңә был ҡараш шул тиклем ныҡ тәьҫир итте: тәндәрем зымбырҙап китте. Ни күҙем менән күрәйем: минән аҙ ғына һулдараҡ биш аҙым ситтәрәк ергә бер аҙ эйелеберәк үҫкән талға ҙур ғына аҡ йылан уралып, үрмәләп менеп бара.*

ИНТЕРНЕТТАН

ҒҮМЕР ОҘАЙЛЫҒЫН...

насар ғәҙәт билдәләй

■ Төрлө хуш еҫтәр менән дауалау ябай граждандар араһында ғына түгел, ә медицина хеҙмәткәрҙәре араһында ла киң популярлыҡ яулай бара. Мәҫәлән, Америка Ҡушма Штаттарында Америка онкологик йәмғиәте был дауалау ысулын традицион медицина менән бергә ҡулланырға тәҡдим итә. Ароматерапия ниндәйҙер ауырыуҙан дауаламай, әммә ҡайһы бер пациенттарға сирҙең кире тәьҫирен еңергә булышлыҡ итә, мәҫәлән, йоҡоһоҙлоҡтан, күңел болғаныуынан, баш ауыртыуынан ҡотолдора, ти белгестәр. "Ароматерапияла ҡулланылған эфир майҙары сәскә, үҫемлек япрағы һәм тамырынан алына, - ти Цинциннати штатындағы клиника директоры Хал Блэтмен. - Был майҙарҙы ванна ингәндә йәки ингаляциялар рәүешендә ҡулланырға була". Стрестан һәм мускулдар көсөргәнешенән ҡотолоу өсөн ала миләүшә йәки розмарин майы файҙалы. Бөтнөк һәм имбирь майын күңел болғаныуы һәм арыуға ҡаршы ҡулланалар. Эвкалипт майы тын юлдарын дауаларға ярҙам итә. Ароматерапияның кире эҙемтәләре лә бар. Табиптар был майҙарҙың бик "әүҙем" булыуын белдерә һәм аллергияға килтереү мөмкинлеген иҫтә тоторға кәңәш итә.

■ Ҡара шоколад ҡандағы насар холестерин кимәлен кәметә, ә ағы холестеринды күтәрә. Сан-Диего университеты ғалимдары үткәргән бәләкәй генә тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, ҡара шоколад составындағы флаванол матдәләре йөрәккә файҙалы. Тикшеренеүҙәрҙә 31 кеше ҡатнашҡан, уларҙың ҡайһы берҙәре 15 көн дауамында 51-әр грамм ҡара (70 процент какао), ҡайһылары аҡ шоколад ашарға тейеш булған. Ҡатнашыусыларҙың ҡан баҫымы, ҡан әйләнеше, липидтар циркуляцияһы, ҡандағы глюкоза кимәле даими тикшерелеп торған. Тестар күрһәтеүенсә, ҡара шоколад ашаусыларҙың "яҡшы" холестерин кимәле юғарыраҡ булып сыға. Ҡара шоколад йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен иҫкәртергә һәләтле булһа ла, тикшеренеүселәр уны артыҡ ашамаҫҡа кәңәш итә, сөнки уның калорияһы ла юғары.

■ 2030 йылға ирҙәрҙең ғүмер оҙайлығы ҡатын-ҡыҙҙарҙыҡына етәсәк, ти ғалимдар. Әлегә тиклем көслө заттар ҡатын-ҡыҙҙарға ҡарағанда аҙыраҡ йәшәй ине, әммә бөгөн уларҙың ғүмер оҙайлығы үҫеше күҙәтелә. Белгестәр фекеренсә, был ирҙәрҙең сәләмәтлегенә күберәк иғтибар итә башлауы, айырыуса тәмәке тартмауы, зарарлы производстволарҙа эшләмәүе менән бәйле. Әгәр ҙә 1920 йылдарҙа ир-егеттәрҙең 80 проценты тәмәке тартһа, был зарарлы ғәҙәт менән бәйле сирҙәрҙең күбәйеүе үткән быуаттың 70-се йылдарына тура килә. Бөгөн иһә ирҙәр тәмәкенән йышыраҡ баш тарта, шул уҡ ваҡытта ҡатын-ҡыҙҙар араһында тәмәке тартыусылар күбәйә, ти ғалимдар. Был статистик тикшеренеүҙе үткәреүсе профессор Лес Мэйхью әйтеүенсә, һуңғы 20 йыл эсендә ир-егеттәрҙең ғүмер оҙайлығы 6 йылға артҡан, әгәр ҙә был һан артабан да ошонан көмеләһә, яҡындағы 20 йыл эсендә ирҙәр ҡатын-ҡыҙҙарҙы ҡыуып етәсәк.

■ Тикшеренеүҙәр күрһәтеүенсә, көй тыңлау хәүеф тойғоһон һәм депрессияны кәметә, кәйефте яҡшырта һәм баш мейеһенең ҡайһы бер өлөштәрен уята. Әммә Америка ғалимдары билдәләүенсә, эш эшләгән ваҡытта яратҡан көйөңдө тыңлау эштең сифатына кире йоғонто яһай икән. Неврологтар көй һәм тауыштарҙың мейе функцияларына тәьҫирен тикшереп, тулы тынлыҡта ғына мейенең яҡшыраҡ эшләй алыуын асыҡлаған.

ТӘБИҒӘТ МӨҒЖИЗӘЛӘРЕ

Хәҙер беҙ йыландар тураһында бер ни белмәйбеҙ тиерлек, хатта улар менән осрашҡанда ике лә уйлап тормаҫтан ҡорбаныбыҙҙың ғүмерен ҡыйырға ла күп һорап тормайбыҙ. Ә беҙҙе һағайырға мәжбүр иткән йыландарға боронғолар ниндәй мөнәсәбәттә булған һуң? Ни өсөн йылан, ҡот килтереүсе, тип һаналған? Ошо һорау мине бала саҡтан борсой, сөнки мин йыландар мыжғышып торған Ирәндек ҡуйынында урынлашҡан ауылда үҫтем. Гәзит уҡыусыларға үҙемдең көндәлегемдәге яҙмаларҙан өҙөктәр тәҡдим итмәксемен.

ЙЫЛАН МАЖАРАЛАРЫН...

тарих итеп һөйләргә генә ҡалмаһын ине

Йылан - изге йәнлек, тип әйтә килделәр...

1940 йылдар аҙаҡтары. 70 өйҙән торған Күсей ауылында өс урам: берһе - оҙон үҙәк һәм ике ҡыҫҡа урамдар. Ауылда бер ниндәй техника юҡ. Хатта 1956 йылғаса бер кемдә лә велосипед та булманы. Әлеге лә баяғы һуғыш шойҡаны инде: аслыҡ, яланғаслыҡтан саҡ ҡотола барған ваҡыт ине бит...

Йәй етһә, ауыл урамдары балаҫ һымаҡ түшәлеп ятҡан бәпкә үләне менән ҡаплана. Беҙ, малай-шалай, ярым яланғас көйө имгәкләп йөрөгән сағыбыҙҙан алып мәктәп йәшенә еткәнсе гел тәбиғәт ҡосағындабыҙ, өлкәндәр - гел ҡырҙа. Уйнап йөрөгәндә беҙҙең эргәнән йә бер, йә икенсе төрлө йылан шыуышып үтеп китә. Был хәлгә өйрәнеп бөткәнбеҙ, ниндәйҙер мал үтеп киткәндәй генә итеп тоябыҙ. Әсәй-өләсәйҙәр беҙгә: "Йылан - изге йәнлек, уға тейергә ярамай. Әгәр уны үлтерһәң, ҡарғышы төшә", - тип йыш әйтеп торғас, йыланға күҫәк күтәрергә, таш бәрергә уйлаған бала ла юҡ ине арабыҙҙа.

"Үҙебеҙҙең" йыланыбыҙ бар ине.

Беҙҙең әсәйебеҙ Гөлнур бала саҡтан ауырлыҡты күп күргән һәм 13 баланы ир еткергән кеше ине. Уның бер ҡылығына гел иғтибар итә инем: һыйырҙы һауып бөтә лә, һарайҙа ултырған бер сеүәтәгә һөт ҡойоп ҡалдыра. Бер көн һорай ҡуйҙым: "Әсәй, нимәгә һөт ҡояһың ул?" - тим. Ул миңә: "Һарайҙа бер йылан йәшәй, шуға һөт ҡоям. Ул беҙҙең ғаиләгә яҡшылыҡ килтерә. Йыландың фатихаһы, рәхмәте көслө була", - тине. Был һүҙҙәрҙе ишетеү менән мин йыландың нисек һөт эсеүен күрергә теләп, ситтән генә күҙәтә башланым. Ярты сәғәт самаһы ваҡыт үткәс, бер ярыҡтан йылғыр ғына бер йылан килеп сыҡты ла, тура һарай соланында ултырған сеүәтәгә йүнәлде. Мин тын да алмай ҡарап торам. 3-4 минут үтеүгә "ҡунаҡ", һарайҙан сығып, һайғауҙан эшләнгән ҡапҡа эргәһендәге беҙ гел генә уйнаған урынға - ҡояшта ҡыҙған тупраҡҡа өйөрөлөп кенә ятып алды. Ипләп кенә сеүәтәне барып ҡараным: уның эсендә әсәй ҡойған һөттөң бер тамсыһы ла ҡалмағайны. Был хәл бөгөн булһа, беҙ нисек ҡабул итер инек икән? Беҙҙең ата-әсәйҙәр быуыны тәбиғәткә күпкә яҡыныраҡ булған шул: уны ярата белгән, ихтирам иткән. Сөнки телдән-телгә, атанан - улға, әсәнән ҡыҙға еткерелә килгән аҡылды тотҡан улар...

Ҡыҙғаныс ауаздар...

1951 йылдың август айы.Ҡоролоҡ арҡаһында тау-түбәләрҙә хатта ҡылған да, селек тә кибеп бөттө. Туғайҙа һәм ҡыуаҡлыҡ буйҙарында ғына һирәк кенә йәшеллек күренә. Бер көн ауылға "Үрге Тоҡан һаҙлығы яна!" тигән хәбәр ишетелде һәм барыһын да хәрәкәткә килтерҙе. Ауыл халҡы саҡрым ярым алыҫлыҡта ятҡан янғынға ҡарай йүгереште. Беҙ, өлкәнерәк балалар ҙа, ауылда тороп ҡалманыҡ. Ел төньяҡтан көньяҡҡа ҡарай иҫә. Ел аҫтында Үрге Тоҡанға терәлә яҙып Иҫәнбәт, Ишбирҙе һәм Түбәгә киткән юл, шулай уҡ бер ниндәй үләнһеҙ тороп ҡалған тау ята. Беҙ, малайҙар, шулай уҡ сыбыҡ һындырып, янғын һүндерергә керештек. Күберәк тал, муйыл үҫкән ер, һирәкләп ерек ағастары ла күренә. Ут һүндерергә керешкән генә инек, наҙлыҡ эсенән ике ҡуян сығып ҡасты. Берәүһен ярты-лаш төтөн ҡаплаған, бахырҙы. Әсе итеп һыҙғырышҡан, сыйылдашҡан тауыштар донъяға таралды бер заман. Эргәлә йөрөгән Сөнәғәт ағай: "Йыландар яна, түҙә алмайынса, бөтә көстәренә ҡысҡырышаларҙыр, бахырҙар", - тине. Мин эшемдән туҡтап тороп, артҡараҡ сигенеп, тыңларға керештем был тауышты. Күҙҙәрҙән йәштәр атылып сыҡты. Күҙ йәштәремде берәйһе күреп ҡалыуҙан ҡурҡып, үҙемде тиҙ генә ҡулға алдым да, ҡабат ут һүндерергә керештем. Һаҙлыҡ ике көн янды. Һуңынан да бер аҙнанан ашыу төтәп ятты. Был хәл әле булһа минең хәтерҙән сыҡмай: 60 йыл үтһә лә, күңелгә тынғылыҡ бирмәй күҙ алдында тик тора...

Серҙе сисһәм дә булалыр...

1952 йылдың сентябрь айы. Ял көнө дүртәүләп - Мөнирә, Флүрә, Фәрзәнә апайҙарым һәм мин бәләкәй арбаға тоҡтар, биҙрәләр һалып, урманға балан йыйырға киттек. Үткән йыл янған Үрге Тоҡанды үткәс, Оҙон Һаҙ башлана. Оҙон Һаҙҙың баландары алыҫтан уҡ ҡыҙғылт-һары төҫтә янып күренеп ултыра. Дүртәүләп бер балан ҡыуаҡлығын тиргәс, апайымдар икенсе ҡыуаҡҡа күсте, ә мин Ишбирҙе яғына киткән юл буйлап тирәяҡты тикшереп килергә киттем. 50-60 метр самаһы атлағас, балан бик уңған бер ергә барып юлыҡтым. Бер заман муйыл, тал шырлығын үтеп барышлай, кемдеңдер миңә теклəп ҡарап торғанын тойғандай булдым: миңә был ҡараш шул тиклем ныҡ тәьҫир итте: тәндәрем зымбырҙап китте. Ни күҙем менән күрәйем: минән аҙ ғына һулдараҡ биш аҙым ситтәрәк ергә бер аҙ эйелеберәк үҫкән талға ҙур ғына аҡ йылан уралып, үрмәләп менеп бара. Ни аралалыр башының ике яғынан ҡыҫҡа ғына ҡолаҡтары күренеп ҡалды. Бер ваҡытта ла йыландарҙа ҡолаҡ кеүек нәмәне күргәнем булмағас, аптыраным. Ололарҙың һөйләгәне иҫкә төшөп ҡалды: "Аҡ йылан Аллаһы Тәғәләнең ерҙәге вәкиле. Уны күргән кеше киләсәктә..." Быны үҙемсә аңлап ҡалдым да, ипләп кенә артҡа сигенәм. Йылан минә ҡарап алды ла, хәрәкәт тиҙлеген үҙгәртмәйенсә генә тал осона менеүен дауам итте. Мин тыныслана биреп, боролдом да, апайымдар яғына киттем. Ололар әйткән тағы бер һүҙ иҫкә килеп төштө шул саҡ: "Аҡ йылан күрһәң, уны ҡасан, ҡайҙа осратыуың тураһында бер кемгә лә һөйләмә!" Ошо көнгәсә был һүҙҙәрҙе тотоп килдем. 68 йәшемдә был серҙе асыуымды Аллаһы Тәғәлә һәм аҡ йылан ғәфү итер, тип ышанғы килә.

Йыландың кешегә тәьҫир итеүен мин бәләкәйҙән белеп үҫтем. Бер генә хәтирәне әйтеп үтәйем: бала саҡтан олоғайғансы 20-ләп кешенең йылан үлтереүенә шаһит булырға тура килде. Анализ яһап ҡарайым: ул кешеләрҙең берһе лә бөгөн иҫән түгел, күбеһе фажиғәле үлем менән был донъянан китеп барҙы... Бынан сығып, нығымтаны һәр кем үҙе яһар: былар ябай тап килеүме икән, әллә тәбиғәт ҡанунымы?

Самат БИКБИРҘИН.
Баймаҡ районы Теməс ауылы.
(Дауамы бар).

ӘЙҘӘ, СӘЛӘМӘТ БУЛАЙЫҠ!

БАЛА САҠ САФЛЫҒЫН...

кире ҡайтарырға ине

Марат АБДУЛЛИН, "Айыҡ Башҡортостан" хәрәкәте лидеры: Мин үҙемде сағыштырмаса сәләмәт тип иҫәпләйем, ләкин "йәне сәләмәт булған тән генә сәләмәт" тигән фекерҙе иҫәпкә алғанда, миңә йән-аҡыл сәләмәтлеген һаҡлау, уны бала сағымдағы сафлыҡҡа ҡайтарыу өҫтөндә эшләйһе лә эшләйһе әле. Сөнки ҙур мегаполис шарттарында, глобаль ҡулланыусылар йәмғиәтендә йәшәү сәләмәтлеккә лә кире тәьҫир итә торған бихисап һынауҙар алдына ҡуя.

Йән-аҡыл сәләмәтлегенең нигеҙе - иман. Хоҙай ҡуйған әхлаҡ принциптарынан тайпылмау. Шул ҡанундарҙан тайпылмай йәшәргә тырышам.

Тән сәләмәтлегенә килгәндә, бер нисә факторҙы билдәләп китер инем. Сәләмәт тормоштоң нигеҙе, миңеңсә, айыҡ тормош алып барыу. Йәғни ниндәй генә байрам, йә ҡайғы булмаһын, ауыҙыңа бер тамсы хәмер-тәмәке алмау мөһим. Сөнки бөгөн хәмер-тәмәке милләтебеҙҙе ҡоротоуҙа иң көслө геноцид ҡоралына әүерелде. Статистика һандары ҡот осҡос. Тыуған районым Әбйәлилдә генә һәр йыл пенсия йәшенә етмәгән 500-гә яҡын кеше хәмер-тәмәкене "икмәк урынына ашау" арҡаһында был донъянан китә. Рәсми медицина, әлбиттә, быны йөрәк-ҡан тамырҙары, бауыр ауырыуҙарына, үҙ-үҙенә ҡул һалыусыларға һ.б. һылтай. Белеүегеҙсә, Рәсәй, шул иҫәптән Башҡортостан, ер аҫты-өҫтө байлыҡтарына бай. Илебеҙҙе ҡорал менән яулап булмауын иҫәпкә алғанда, тап йәшерен һәм аҫтыртын "геноцид ҡоралы" сәйәсәтенең ни өсөн уҙғарылыуы аңлашыла ла инде. Иң аянысы шул - киң мәғлүмәт сығанаҡтары, йәмәғәтселек фекере быны тәбиғи процесс тип күрһәтә, йәнәһе, һәр кеше үҙ ихтыярына ярашлы ауыҙына рюмка-төпсөк ала.

Икенсенән, рәсми медицина мотлаҡ тип иҫәпләгән прививкаларҙы яһатмау. Сөнки бөгөн төрлө сирҙәргә ҡаршы яһалған прививкалар - бер яҡтан, глобаль олигархтар ҡулындағы отошло бизнес, икенсенән, алдан әйтеүемсә, геноцид ҡоралы. Мәҫәлән, үҙемдең 4,5 йәшлек улыма әлегәсә бер прививка ла эшләтмәнем һәм эшләтмәйәсәкмен.

Өсөнсөнән, таҙалыҡ. Имандың яртыһы - таҙалыҡ, тиҙәр. Ашаған аҙығың, эскән һыуың, һулаған һауаңдың һ.б. таҙа булыуы мөһим.

Шулай уҡ спорт менән шөғөлләнеү, аҙнаһына бер-ике көн мотлаҡ дуҫтар, таныштар менән футбол, волейбол уйнау мөһим.

Шул уҡ мәлдә ҡайһы бер сирҙәрҙең Хоҙай тарафынан ебәрелеүен дә оноторға ярамай, уларҙың маҡсаты - ҡылған гонаһтарыңды был донъяла юйыу. Көслө иманлы кешеләр үҙҙәре үк сирҙәр һорап доға ҡыла...

Земфира ХӘБИРОВА яҙып алды.

МӨҒЖИЗӘЛӘР ЗАМАНЫ

КОСМОЭНЕРГЕТИКА ҺӘМ СӘЛӘМӘТЛЕК

Ауырыу сәбәптәре

Алдан әйтеп үтеүебеҙсә, сәләмәт булыу өсөн ауырыуҙарҙың сәбәбен табырға һәм уларҙы бөтөрөргә кәрәк.

Бөйөрҙәр, мәҫәлән, ҡурҡыуҙан интегә. Бер ниндәй ҙә бәйләнеш юҡ, тиһегеҙме? Әйҙәгеҙ, асыҡлайыҡ. Бөйөр аҫтында хәүеф, ҡурҡыу ваҡытында адреналин бүлеп сығарыусы биҙҙәр бар (уларға бойороҡто төпкө аң бирә) һәм организм мобилизацияланa, күп энергия сарыф ителә.

Мәҫәлән, ҡуян төлкөнө күреү менән уның бөйөр аҫты биҙҙәре адреналин бүлеп сығара һәм ул ҙур соҡорҙарҙы ла һикереп сыға аласаҡ һәм артыҡ энергияһын бөтөргәнгә тиклем сабасаҡ.

Кеше лә шулай уҡ, ҡурҡҡан сағында (эше өсөн, туғандары өсөн һ.б.) адреналин бүленеп сыға, ә ғүмер өсөн аныҡ хәүеф юҡ - бер кемдән дә ҡасырға кәрәкмәй. Барлыҡ ҡурҡыуҙар ҙа уйлап сығарылған, ә энергияға ҡайҙалыр китергә, сығырға кәрәк, һәм ул йыраҡҡа китмәй, бөйөрҙөргә бирә.

Шулай итеп, был таштарҙың төшөүенә, башҡа проблемаларға килтереүе мөмкин. Таштарҙы ваҡланылар - бер йылдан һуң тағы таштар барлыҡа килә, ваҡланылар - ярты йылдан һуң улар тағы үҫә. Ни өсөн? Сөнки ҡурҡыуҙы алманылар. Ҡурҡыуҙы дарыуҙар (анефтезия эффекты) менән генә баҫтырыу ярҙам итмәй - ауырыуҙарҙың сәбәптәрен бөтөрөргә кәрәк!

Ҡолаҡтар ишетергә, тыңларға теләмәгәндән ауырта. Тимер юлы эргәһендә йәшәүселәр ошо тауышты ишетмәй башлай - мейе, төпкө аң ярҙамында, тирбәлештең тейешле диапазонын һүндереп ҡуя. Ейәне өлөсәһенең даими мыжыуын ишетмәй (уға ул кәрәкмәй), әммә был телмәр диапазоны боҙолоуға килтерә һәм ул аҙаҡ башҡаларҙы ла ишетмәй башлай.

Йыш ҡына ауырыуҙар кешенең үҙенең теләгенән килеп сыға (төпкө аң беҙҙең барлыҡ теләктәребеҙҙе лә үтәлергә тейешле тип ҡабул итә). Мәҫәлән, бала балалар баҡсаһына бармаҫ өсөн ауырырға теләй - температураһы күтәрелә. Ата-әсәләре асыулана, йәнәһе, бала уларҙың иғтибарын йәлеп итер өсөн "ауырый". Таныш күренешме?

Ҡайһы бер ололар инвалидлыҡ өсөн пособиеға ҡыҙығып, яҡындарының иғтибарын талап итеп, үҙҙәрен ниндәйҙер эшкә ҡушмауҙарынан ҡасып, "ауырырға" теләй. Шулай итеп, ауырыу теләү программаһы эшләй башлай, уны аҫҡы аң бер һүҙһеҙ үтәй. Бындай кешене дауалау ҙа мөмкин түгел - уға ауырыу файҙалыраҡ.

Әгәр кеше дауаланып ҡараһа ла, артыҡ яфаланмаҫ, файҙаны юғалтмаҫ өсөн, ауырыуҙың үҙен түгел, бары тик ауырыуҙың симптомдарын ғына алып ташларға теләй (аҫҡы аң дауаланмаҫҡа кәрәк икәнен белә, сөнки файҙа юғала).

Бер ваҡыт йәш ир: "Әгәр мин ҡаты сирләһәм, алимент түләмәҫ инем", - ти. Һөҙөмтәлә ул ҡаты сиргә дусар була - үҙен-үҙе шуға программалай.

Аҫҡы аң - ҙур көс. Ул ашҡаҙан һутының бүленеп сығыуын, аҙыҡтың эшкәртелеүен, кәрәкле ферменттарҙың һәм гормондарҙың бүленеүен, синтезды һәм тарҡалыуҙы, йөрәк тибешен, сәстәр үҫеүен контролләй (шул уҡ ваҡытта ауырырғамы, юҡмы икәнлекте лә). Ошо бөйөк көстө ыңғай йүнәлештә генә ҡулланығыҙ.

Түбәндә ҡайһы бер ауырыуҙарҙың һәм проблемаларҙың социаль сәбәптәрен ҡарап үтәйек:

1. Баш - кире, кәрәкмәгән уйҙар тупланмаһы (ауыр уйҙар); ҡан һәм тамырҙар насар (тарайған, мейе тамырҙары тығылған).

2. Танау - үҙ-үҙеңә түбән баһа (танауын төшөргән) йәки тәкәбберлек (танауын күтәргән); насар экология, насар иммунитет.

3. Күҙҙәр - объектив хәл-торошто күрергә теләмәүҙән, күрәлмаусанлыҡтан интегәләр (күралмайым - күрмәйем); күҙҙәрҙең хәрәкәте аҙ, структураланған һыу етешмәй.

4. Тештәр - яман теллелек, "тешһеҙлек", үҙ-үҙеңде яҡлай алмау; ыңғай эмоцияларҙың етешмәүе (йылмайыу); организмда кремний етешмәй (шул арҡала кальций үҙләштерелмәй), насар тәрбиә.

5. Тамаҡ - үҙ-үҙеңде күрһәтеүҙе баҫып килеү, буйһоноусанлыҡ (тамаҡтан алдылар), нимәнелер ҡабул итмәү (йота алмай); түбән тирбәлеш, аҙыҡта әселектең етешмәүе.

6. Муйын - башҡалар менән мөнәсәбәттәрҙә һығылмалыҡтың юҡлығы, йомшаҡ ихтыяр (башҡаларҙы елкәһенә ултырта); башты төрлө яҡҡа бороу бурысын үтәргә теләмәй, энергияның ҡатып ҡалыуы, тоҙ ултырыуы.

7. Ҡалҡан биҙе - саманан артыҡ талапсанлыҡ, ентеклелек, теләктәргә ҡаршы тороу, тормош стимулы юҡлығы (кеше һоҡланыуҙан, хыялланыуҙан, ижад итеүҙән туҡтай); организмда йодтың етешмәүе йәки уның артыҡ булыуы.

8. Ҡурылдай - азатлыҡ юҡлығы, үҙ бурыстарыңды үтәргә теләк булмауы, буйһоноу, күңел төшөнкөлөгө; тәбиғәт энергияһының, ләззәттең, тәрән тын алыуҙың етешмәүе.

9. Үпкә - үпкәләүҙәр; тәбиғәттән айырылыу, саф һауаның етешмәүе, насар экология, насар иммунитет.

10. Күкрәк - иркәләү, хәстәрлек, ир-атҡа һөйөү етешмәүе, нәзәкәтлекте юғалтыу; ҡултыҡ аҫтындағы лимфа төйөнө аша токсик ағыуҙарҙың сығыуына дезодоранттар менән юлды ҡаплап ҡуйыу, организмдың шлакланыуы, артыҡ ауырлыҡ.

Рауфан МОРТАЗИН.

УҢЫШ ҠАҘАН

ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

Камиллыҡтың алтын асҡысы

"Кеше һәр ваҡыт үҙе өсөн үҙе яуап бирә. Ул үҙенең тәжрибәһе иретмәһен камиллыҡ һәм характер суйынына әйләндерергә тейеш. Уның уңышы йондоҙҙар менән түгел, ә үҙе менән билдәләнә. Ул үҙендәге кире ғәҙәттәрҙе бөтөрөү һәм тәртибен яҡшыртыу өсөн көрәшергә, уртасалыҡҡа һәм яуызлыҡҡа ҡаршы һуғыш иғлан итеп, тормошон иң юғары идеалдар һәм рухи ҡиммәттәр буйынса ҡороға тейеш", тигән Франк Кертис Уильямс.

